*Яҙмыш үҙенә буйһондормаҫ элек уны бала кеүек ҡулынан тотоп йөрөтөргә һәм үҙ иркеңә буйһондорорға кәрәк; ә инде яҙмыш һине үҙенә буйһондороп өлгөргән икән, уны яратыу фарыҙ.*

*(Ф. Ницше).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8 - 14 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2011 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №2 (420)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Өс көнлөк йәм өсөн...**

күпме шыршы ҡырҡыла



4

**Күлдең һыуын эсмәгеҙ...**

Шулай тигән Урал батырыбыҙ



7

**Ғалимйән Тағанов - йыраусы**

йәки Башҡорттоң бөйөк улының йыр яҙмалары



8-9

**Изгелек һәм яуызлыҡ бөртөктәре,**

йәки Һыуҙың аңы бармы?



15

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Кешегә был донъяла йәшәгәндә йыш ҡына "боҙло һыу"ға ташланырға тура килә. Был нимә: үҙ-үҙеңде һаҡлаумы, әллә ниҙелер иҫбат итергә тырышыу алымымы?

***Анатолий ЛЕГКОТА, Өфөнөң "ҡар кешеһе", 82 йәштә:*** "Боҙло һыуға"ташланыу - минең йәшәү рәүешем, мин боҙло һыуһыҙ йәшәй алмайым. Бының менән мин үҙ-үҙемде һаҡлап ҡына ҡалмайым, ә үҙ-үҙемә һәм башҡаларға тәбиғәт тарафынан кешегә һалынған көстө һәр саҡ уяу тотоу зарурлығы хаҡында иҫкәртергә теләйем. Был минең "Ике доминанта" теориямдың нигеҙен тәшкил итә һәм был турала гәзиттә күп яҙғаным да булды: кеше организмы эшмәкәрлегенең старт нөктәләре унның акупунктураһында, йәғни тәненең өҫкө өлөшөндә урынлашҡан. Шул нөктәләргә бер туҡтауһыҙ һыуыҡ һыу, энә йә массаж ярҙамында тәьҫир итеп тормаһаң, организмың үлә, һүнә башлай. Ә беҙ, кешеләр, киреһенсә, шул нөктәләрҙе хайуан тиреләренән тегелгән йылы кейемдәр менән ҡаплап, үҙебеҙҙе иртә үлемгә дусар итәбеҙ.

Тормоштоң "боҙло һыуҙары" тәбиғәттекенән бер яғы менән дә айырылмай. Хәҙерге тиҙлек һәм мәғлүмәт заманында кеше бер туҡтауһыҙ "боҙло һыуға" ырғый. Һәр саҡ ваҡиғаларға эйәреп, барыһына ла риза булып йәшәгән кеше - донъялағы иң бәхетһеҙ кеше. Сөнки әленән-әле "боҙло һыуға" ырғып, ғазап татыған кеше генә ысын бәхетте тоя.

***Хәмиҙә БАРЛЫБАЕВА, пенсиялағы уҡытыусы:*** Рухлы, ынтылышлы, маҡсатлы кеше генә "боҙло һыуға" ташлана алалыр. Вайымһыҙҙар иһә, "йылы юрған аҫтын" үҙ итә. "Боҙло һыуға" ташланыусы кеше был аҙымы менән үҙенең шәхси ихтыяжын үтәүҙе генә маҡсат итеп ҡуймайҙыр ул, иң тәүҙә башҡалар хаҡында уйлайҙыр. Тик үҙе хаҡында ғына ҡайғыртҡан кеше был аҙымға бара алмай, бының өсөн ижтимағи фиҙаҡәрлек талап ителә. Кемдер берәү "боҙло һыуға" ташланмайынса тороп, йәмғиәттә үҙгәрештәр ҙә барлыҡҡа килмәй, сөнки яңы фекер һәр ваҡыт ике төрлө фекерҙең, көстөң, ҡайнарлыҡ менән һалҡынлыҡтың "бәрелешенән" барлыҡҡа килә. "Боҙло һыуға" ташланыусы, үҙенә ҡыйынлыҡ килтереп булһа ла, үҙе йәшәгән йәмғиәттең, коллективтың, милләттең, республиканың, илдең ихтыяжын беренсе урынға ҡуя. Бер кешенең үҙ-үҙен аямай боҙло һыуға ташланыуынан тотош ил, милләт яңы һулыш-һынылыш алып йәшәп тә китә. Беҙҙең милләт миҫалында ла бар ундай күренештәр. Һуңғыларынан башҡорт халыҡ шағиры Рәми Ғариповты ғына алайыҡ. Ул партия идеологияһының иң көслө заманында туған телебеҙҙе яҡлап, ана ниндәй "боҙло һыуҙарға" сумды, үҙ-үҙенә һәм халҡына тоғро ҡалды. Бөгөн иһә, һәр бер башҡорт кешеһе үҙ милләтенә һәм туған теленә тоғролоғон уның һүҙҙәре менән ҡабатлап, ғәмәлдәре менән дәлилләй. Тимәк, бер кешенең "боҙло һыуға" ташланыуы тотош милләттең тиҫтәләгән йылдар буйына рухлы, маҡсатлы йәшәүен тәьмин итә ала.

***Илсур ИРНАЗАРОВ, Баймаҡ районы Темәс ауылы ир-уҙаманы:*** Хәҙерге донъяла замандан артта ҡалмай йәшәйем, тиһәң, бер туҡтауһыҙ "боҙло һыуға" ташланып йәшәргә тура килә. Заман үҙе лә шулай бит: уның йыллап түгел, көнләп-сәғәтләп үҙгәреүе кешенең дә шул яңылыҡтарға ҡулайлашыуын талап итә. Тормоштоң бындай ағымына өлгөрә алмай, сиккә килеп терәлеүселәр боҙло һыуға сума ла инде. Ҡайһы саҡ тормошонда көйләп ебәрер өсөн дә ташланырға тура килә унда. Бар ул барыһын да Хоҙайға тапшырып, күктән алма яуғанын көтөп ултырыусылар. Ә бит ағастан алманың өҙөлөп төшкәнен көтөп ултырып, ғүмереңде лә үткәреп ебәрергә мөмкинһең. Йә булмаһа, һин алманың ағастан өҙөлөп төшкәнен көтөп ултырһаң, уны башҡалар өҙөп алып китә. Миненсә, йылға туңмаҫ борон боҙло һыуға сумып алыу хәйерлерәктер. Әгәр ҙә йылға туңып, боҙға әйләнһә, унда сумырға уйларһың да ул, башыңды ғына ярырға мөмкинһең. Был һүҙҙәремдең кинәйәһен аңлайһығыҙҙыр: һәр нәмәне алдан белеп, йүнен күргән йәғни "арбаны - ҡыш, сананы йәй әҙерләгән" хәстәрлекле кешегә бер ваҡытта ла боҙло һыуға сумыу ихтыяжы ҡалмайҙыр. Беҙ барҙың ҡәҙерен белергә, уны һаҡларға бурыслыбыҙ. Мөмкинлектәребеҙ ҡулдан ысҡынып, хоҡуҡ-таяныстарыбыҙ юғалһа, ысынлап та, боҙло һыуға сумып та, уларҙы кире ҡайтара алмаясаҡбыҙ. Мин бында, әлбиттә, милләтебеҙҙең үҙ дәүләтселеге, республика хоҡуғы хаҡында әйтәм. Дәүләтһеҙ милләт - ул яланаяҡ боҙ өҫтөндә баҫып тороусы кеше хәлендә ҡаласаҡ. Юҡҡа ғына беҙҙә элек-электән ир-атарға һәм ҡыҙ-ҡатындарға Дәүләтбай, Байдәүләт, Дәүләтхан, Дәүләтҡол, Дәүләтбикә исемдәрен ҡушмағандар.

**Әмир ҒҮМӘРОВ әҙерләне.**

ИЖАДХАНА

# БАТЫРҠАЙҘЫҢ МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯҺЫ...

## тамырҙарына тоташҡан



**Халҡыбыҙҙың шундай талант эйәләре бар: күңелде шаңҡытҡан ижад өлгөләре менән кеше аңына күнегелгән стандарт сиктәрҙе бәреп-ватып килеп инә. Ундайҙарҙың бер үҙенә, бер эшенә ҡарап, һоҡланыуҙан бигерәк ғәжәпһенеү ҙә, бер аҙ сәйерһенеү ҙә өҫтөнлөк итә тәүҙә: "Туҡта-туҡта, был ҡайҙан, күктән килеп төштөмө әллә юғиһә?.."**

(Дауамы 11-се биттә).

✓ *Был боронғо ҡала Башҡортостандың ғына түгел, ә Рәсәйҙең дә байлығы икәнен оноталармы, әллә тарихта бер ни ҙә аңламайҙармы улар? Әллә башҡа сәбәп бармы икән?..*



*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

**Иҫке йылдың һуңғы көндәренең береһендә төшлөккә етеп барған ҡояшты ҡапыл йәйғор уратыуын күптәрегеҙ күрмәгәндер ҙә, бәлки. 29 декабрҙә булды был хәл. Йәйғорҙо йәйен күреп өйрәнгәнгәме, ҡапылғарай ҡыштың төрлө төҫтәрҙәге бындай балҡышын күңел ҡабул итә алманы. Шулай ҙа бер аҙҙан ошо хәлгә бәйле күңелдә лә йәйғор барлыҡҡа килде. Йырлағы килә башланы. Тағы ла күпмелер ваҡыт үткәндән һуң, үҙемдән-үҙем был хәлде төрлөсә юрарға, ҡыштың ете төҫлө ошондай сихри балҡышынан мәғәнә эҙләргә керештем.**

# ҠАР АСЫЛЫ ЯМҒЫР,

## йәки Өфөлә ниңә йәйғор балҡыны?

Бала саҡтан алып беҙ йәйғорҙо ергә ямғыр һыуы ташып ҡуйғандан һуң Ай ҡыҙының күккә элеп ҡуйған көйәнтәһе тип атап өйрәнгәнбеҙ. Ә ул көндәрҙә бер нисә тәүлек рәттән республикабыҙҙа бурай-бурай ҡар яуҙы. Тәбиғәт үҙенең ярты йыллыҡ ҡар нормаһын бер аҙнала тултырып үтәне лә ҡуйҙы. Һөҙөмтәлә, тарихта булмаған хәл: баш ҡалаға инер юлда меңәр-меңәр машиналар юл өҙөклөгөнә эләгеп, "бикләнеп" ултырҙы. Ҡайҙалыр, Мәскәү яғында ямғыр ҙа яуып үтеүе хаҡында хәбәр иттеләр. Һәр хәлдә, саҫҡауыраҡ көндәге беҙҙең өҫтәге йәйғор балҡышын бер нисек тә бынан меңәр саҡрым алыҫлыҡта яуған ямғырға бәйләп аңлатып булмайҙыр, тиеүем. Ә бит, төптән уйлап ҡараһаң, ҡарҙың асылы шул уҡ ямғыр, йәғни һыу бит. Тимәк, тием, фекер ебен ямғырға бәйләп, быйыл йәй бик ҡоро килде һәм йәй яуыр ямғыр әле ҡар булып төшөп, шул ямғырҙың йәйғоро әле саҡ килеп балҡый түгелме? Әгәр ҙә улай түгел икән, ҡышҡы йәйғорҙо тағы ла ниндәй хәлгә бәйләп аңлатып була һуң?

Тәбиғәт тә тарихи хәҡиҡәттең үҙе кеүек: шымып-шымып тора ла, барыбер бер балҡып, үҙ һүҙен әйтеп ҡуя. "Шатланығыҙ, кешеләр, ергә йәйен яумағанды ҡыш бәрәкәт итеп яуҙырам, бына ошолай итеп йылмайығыҙ!" - тип әйтергә теләй беҙгә бөйөк Тәбиғәт ҡышҡы йәйғорҙо балҡытып. Ошо ерҙең ете мөғжизә төҫө лә, ете ырыу нигеҙ һалған милләтебеҙ үҙе лә, республикабыҙҙың төп символына әүерелгән ете ҡурай тажы ла бар ошо балҡышта...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Элек халыҡ табибтары ныҡ ауырыған кешенең ғүмере бармы-юҡмы икәнен белер өсөн уның янына сабый баланы килтереп һалғандар. Әгәр ҙә бала илаһа, көйһөҙләнһә - "Уның тирәһенә әжәл килеп урынлашҡан, оҙаҡҡа бармаҫ", әгәр ҙә бала шатланһа - "Ғүмере бар", тигәндәр. Шулай булғас, Хоҙайыбыҙ ҡышын да баш особоҙҙа йәйғорон балҡытып торғас, Башҡортостаныбыҙҙың, милләтебеҙҙең ғүмере бар. Иншалла!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ИШАРА*

# ИЛЕБЕҘ БЕР,

## тарихыбыҙ ҙа бер түгелме?

**Тәрбиәселәребеҙ беҙҙе, бер төркөм етем балаларҙы, Бөрйәндән Өфөгә алып килеп, иртәгә таң атҡас килеп алабыҙ, тип алдаштырып ҡайтып киткәс, көттөк-көттөк тә, өйөлөшөп кенә һыҡтап илай башланыҡ. Өфөләге тәрбиәсе апайҙар иртәнге сәйҙән һуң беҙҙе өҫтәлгә ултыртып, һәр беребеҙгә берәр бит аҡ ҡағыҙ таратып бирҙе. Өр-яңы ҡәләм дә өләшкәс, һүрәт төшөрөргә ҡуштылар. Тәү тапҡыр ҡулыма ҡәләм алыуым асыҡ булып хәтеремдә ҡалған. Аҡ ҡағыҙға ҡара һыҙыҡтар һыҙғылап, шатланыштыҡ. Һуңынан ҡағыҙҙарҙы йыйып алдылар. Дүрт йәшлек баланың күңеленә оҡшап ҡалғандыр инде һүрәт төшөрөү, оҙаҡ ҡына тәрбиәсе апайҙың артынан эйәреп, һүрәтемде һорап йөрөнөм.**

Өфөгә лә өйрәндек, кейендерҙеләр, дауаланылар. Көндәр үтә торҙо. Бер дәрестә төшөргән ҡурсаҡ һүрәтем бөтә ҡыҙҙарға ла оҡшаны. Фәркимә исемле уҫал ҡыҙ бар ине, уның һуғышыуҙарынан бөтәбеҙ ҙә ҡурҡа инек. Ул үҙенең дәфтәренә лә ошо ҡурсаҡ һүрәтен төшөрөүемде һораны. Мин уның талабына күнеп, дәфтәренә бик тырышып төшөрҙөм ул ҡурсаҡты. Тик һүрәтте күреп, Фәрҡимәнең асыуы ғына ҡабарҙы. "Юрый йәмһеҙ төшөргәнһең, хәҙер мин һинең ул ҡурсағыңды төрмәгә ултыртам", - тип, асыу менән һүрәтте һыҙғыланы. Ҡурсаҡ урынына ҡара кәбән барлыҡҡа килде...

Был етмешкә еткән инәй ни эшләп был хәтирәһен иҫенә төшөрә әле, тип аптырайһығыҙҙыр. Күптән түгел НТВ каналындағы "Бөгөн" ("Сегодня") тапшырыуында академик Нияз Мәжитовтың Өфө-II ҡаласығы, Өфөнөң әлеге йәшенән өс тапҡыр олораҡ булыуы хаҡындағы әңгәмәһен күрһәтеп бөткәс, Үҙәк журналистары ажарланып ябырылды бит ошо яңылыҡҡа. Бына шул саҡ Фәрҡимәнең аҡ ҡағыҙҙағы һүрәтте ҡара ҡәләм менән һыҙғылағаны күҙ алдына килеп баҫты. 4-5 йәшлек сағымда "Меҫкен Фәрҡимә, үҙ дәфтәрен үҙе бысратты", тип ҡабул итеп, уны байтаҡ йәлләп йөрөгәйнем. НТВ каналы журналистарының ҡылығына: "Меҫкендәр, ҡалай үҙ илдәрен үҙҙәре ҡараға буяй", - тип баһа бирҙем. Был боронғо ҡала Башҡортостандың ғына түгел, ә Рәсәйҙең дә байлығы икәнен оноталармы, әллә тарихта бер ни ҙә аңламайҙармы улар? Әллә башҡа сәбәп бармы икән?..

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*ҠОТЛАУ ҺҮҘЕ*

# ТӘРБИӘЛЕЛЕК...

## визит карточкаһы беҙҙә



**Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты студенттары бөтөн Башҡортостан халҡына ҡайнар сәләм ебәрә һәм Яңы йыл менән ҡотлай!**

Беҙҙең институтыбыҙ Уралдың йөрәгендә - таусылар ҡалаһында урынлашҡан. Бында белем алайым, тәбиғәттән бирелгән һәләтемде асайым тиһәң , бөтөн уңайлыҡтар булдырылған, хатта аудиторияларға ҡуйылған картиналар, ҡаттарҙа урынлаштырылған барельефтар, һәйкәлдәр беҙҙең өсөн үҙҙәре үк бер тәрбиә сығанағы булып тора.Уҡыу йорто директоры Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов етәкләгән уҡытыусылар коллективы беҙҙе һөнәр биреүҙән тыш, иң беренсе нәүбәттә, был тормошта һәйбәт кеше булырға, уңышҡа өлгәшергә, дуҫтарың, коллегаларың, ғөмүмән, бөтә кешеләр менән дә яҡшы мөнәсәбәттәр булдырырға өйрәтә. Сөнки бөгөн тәрбиәлелек үҙен һәм башҡаларҙы хөрмәт иткән кешеләрҙең визит карточкаһы булып тора.

"Киске Өфө"нө шул тиклем яратып уҡыйбыҙ. Бында филологтар ҙа, тарихсылар ҙа, технологтар ҙа үҙҙәренә кәрәкле материалды берҙәй табып, уҡый ала. Беҙ бигерәк тә тәрбиә, әхлаҡ темаларына яҙылған мәҡәләләрҙе үҙ итәбеҙ, уларҙы дәрестәрҙә, буш ваҡыттарыбыҙҙа, айырыуса дөйөм ятаҡта бергәләшеп йыйылып уҡыйбыҙ, һуңынан әҫәргә, геройҙарға ҡарата үҙ фекеребеҙҙе белдереп, дискуссиялар ойошторабыҙ. Матбуғатҡа яҙылыу кампанияһы башланыу менән беҙҙең уҡыу йорто 150 дана "Киске Өфө"гә яҙылды.

**Сибай институты студенттары.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Яңы йылдың тәүге көндәрендә үк Башҡортостан Республикаһы Президенты Көньяҡ Урал төбәгенә эш сәфәре менән сыҡты. "Яҡтыгүл" шифаханаһында булғандан һуң Президент Әбйәлил районы Аслай ауылы халҡы менән осрашты. Бында ауыл эргәһендәге Күлдебай күле территорияһын ситтәргә биреү буйынса бәхәсле хәл килеп тыуғайны. Президент билдәләүенсә, был биләмә ауыл халҡыныҡы, тик улар күл тирәләй тәртип һәм таҙалыҡ булдырырға тейеш. Шулай уҡ ауылға газ үткәреү, мәктәпте, клубты һәм фельдшер-акушер пунктын ремонтлау тураһында һөйләшеп килешелде. Рөстәм Зәки улы районда арендаға бирелгән урмандар мәсьәләһе буйынса ла ниндәйҙер ҡарар ҡабул ителергә тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

✓Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведев федераль дәүләт органдары хеҙмәткәрҙәрен ҡыҫҡартыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.

✓Өфөнөң Октябрь районында элекке эшһеҙҙәр дәүләт ярҙамы менән эшҡыуарҙар сафын арттырҙы. Район хакимиәтендә үҙ эшен асырға теләүсе эшһеҙҙәргә ярҙам итеү һәм уларҙың бизнес-планын ҡарау буйынса комиссия эшләй. Былтыр, мәҫәлән, комиссияға 163 эшһеҙҙән ғариза килгән, уларҙың 54 бизнес-планы ҡаралған, 28-е хупланған. Бынан тыш, үҙ эшенде ойоштороу буйынса 207 консультация бирелгән, 14 эшһеҙ түләүһеҙ курстарҙа уҡытылған.

✓Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса министрлыҡтан хәбәр итеүҙәренсә, республикала Яңы йыл байрамдары тыныс үткән. 31декабрҙә 16 янғын осрағы теркәлгән, 1 кеше үлгән. 1 ғинуарҙа 18 янғын осрағы теркәлгән, 3 кеше һәләк булған. Яңы йылды ҡаршы алған төндә ҡотҡарыусылар 9 тапҡыр юл-транспорт һәләкәте буйынса сыҡҡан.

✓Хоҡуҡ һаҡлау органдарына, күрһәткестәрҙе алдап яҙмайынса, енәйәттәрҙе асыу күләмен үҫтерергә кәрәк, ә енәйәттәрҙе теркәүҙән баш тартҡан хеҙмәткәрҙәргә ҡарата ҡәтғи саралар күрелергә тейеш. Башҡорттостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов республикала хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү буйынса координация кәңәшмәһендә ошо хаҡта белдерҙе. Рөстәм Зәки улы хоҡуҡ тәртибе органдарына дәүләт һатып алыуҙары буйынса тендерҙар һәм конкурстар үткәреү һөҙөмтәләренә даими иғтибар бирергә ҡушты.

**✔ Рөстәм Хәмитов Салауат районында яңы туристик зона булдырыу тураһында белдерҙе. Тыуған яҡты өйрәнеү маршруты Салауат Юлаев тыуып үҫкән урындарҙан үтергә тейеш, тине президент.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Яңы йылға беҙ һәр ваҡыт ниндәй ҙә булһа өмөттәр бағлайбыҙ. Аҡланамы ул өмөттәр аҙаҡ, юҡмы - балаларса бер ҡатлылыҡ менән ышанабыҙ йәки үҙ-үҙебеҙҙе ышандырабыҙ: яңы йылдан яңыса булыр; яңы йылдан ниндәй ҙә булһа ыңғай үҙгәрештәр башланыр; иҫке йылда эшләнеп өлгөрмәгән эштәр яңы йылда мотлаҡ еренә еткерелер; яңы йылдан алып яҡшыраҡ эшләргә, йәшәргә тырышырбыҙ, үҙгәрербеҙ, тип өмөтләнәбеҙ. Эйе, өмөт, киләсәккә ышаныс йәшәтә кешене. Шулай булмаһа, тормоштоң да мәғәнәһе юҡҡа сығыр ине.**

# ЯҢЫ ЙЫЛЫБЫҘ ХУШ КИЛҺЕН,

## юрағандар юш килһен!

➔ Йорт-илебеҙ имен, тыныс булып, балалар үҫтереп, уларҙы аяҡҡа баҫтырырға, кеше итергә тырышып йәшәгән ватандаштарыбыҙ нисек инде киләсәккә ҡараш ташламаһын да, нисек итеп изге хәбәрҙәргә ышанмаһын! Ә бит бындай изге, ҡыуаныслы хәбәрҙәр иҫке йыл ахырында илебеҙҙең иң юғары трибунаһынан яңғыраны. Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведевтың киләһе йылға бурыстарҙы билдәләүсе Мөрәжәғәтнамәһе юҡҡа ғына "балалыҡты яҡлаусы" социаль программа тип нарыҡланмағандыр. Ә Президент үҙе киләсәк быуын хаҡында хәстәрлек күреүҙе ышаныслы, аҡыллы һәм отолошһоҙ инвестиция, тип атаны. Ошоға тиклем ғаилә, бала, уларҙың һаулығын һаҡлау мәсьәләләренә ошондай беренсел әһәмиәт биреп сығыш яһаған башҡа берәй етәксенең булғаны юҡ ине әле. Элегерәк ил ҡеүәтен арттырыуҙың стратегик ҡиммәттәрен оборона сәнәғәтен, машиналар төҙөү өлкәһен үҫтереүҙә күрһәләр, әле был мәсьәләгә ҡараш тамырынан үҙгәртелеп, ниһайәт, төүге планға кеше факторы сыҡты.

Мөрәжәғәтнамәлә йәш һәм күп балалы ғаиләләрҙең иң мөһим проблемаларының береһе торлаҡҡа мохтажлыҡ булыуы билдәләнде. Был мәсьәләне хәл итеү өсөн ипотека кредиттарын һәм торлаҡ заемдарын Әсәлек капиталы менән ҡаплатыу рөхсәт ителде, был тәжрибә киләһе йылда ла уңышлы дауам итәсәк. РФ Хөкүмәтенең иҫке йылдың һуңғы көндәрендә ҡабул ителгән "Әсәлек (ғаилә) капиталын торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға йүнәлтеү ҡағиҙәләренә үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы ҡарары үҙ көсөнә инде. Хәҙер иһә Әсәлек капиталын төҙөлөш ойошмаларын йәлеп итмәйенсә лә торлаҡ йорт төҙөүгә йәки уны яңыртып төҙөүгә тотоноу рөхсәт ителә.

➔ Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Владимир Путин иһә Президент Мөрәжәғәтнамәһендә әйтелгән положениеларҙы аныҡлап, киләһе ике йылға балалыҡты яҡлауға 150 миллиард һум самаһы аҡса бүленәсәк, тип белдерҙе. 2011 йылдың 1 ғинуарынан бөтә балалар пособиелары ла индексацияланасаҡ, тине ул тағы ла. Бала ҡарап оҙайлы ваҡыт өйҙә ултырғандан һуң әсәләрҙең эшкә урынлашыу проблемаларына Путин айырым туҡталды. Балалы ҡатындарға һөнәри йәһәттән дә уҙҙәрен табыуға, һайлаған профессияһында, тормошта унышҡа өлгәшеүҙә ярҙам итеү кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды Премьер.

Ҙур етәкселәребеҙ икеһе бер төптән шундай изге хәбәрҙәр еткереп торғанда, яңы йылға яһаған аҙымдарыбыҙ ҙа ышаныслыраҡ тойола, йәшәүҙең дә ҡәҙере, бәҫе арта төшә.

➔ Балалыҡ һәм ғаилә мәсьәләләренә ҡағылышлы тағы бер яҡшы хәбәр бар: өсөнсө балаһы тыуған ғаиләләргә 2011 йылда уҡ йорт йәки дача төҙөү өсөн ер участкалары бүленә башлаясаҡ. Дөрөҫ, был хаҡта әлегә рәсми ҡарар-фәлән булмаһа ла, һәр төбәк үҙ мөмкинлектәренән сығып, "Торлаҡ" маҡсатлы федераль программа сиктәрендә мәсьәләне хәл итергә тейеш. Әйткәндәй, мөрәжәғәтте беҙҙең республика етәкселеге лә күтәреп алмаҡсы. Декабрь башында Өфөлә "Ер-мөлкәт мөнәсәбәттәрен үҫтереү һәм камиллаштырыуҙа төбәк проблемалары" тип аталған төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференцияла БР ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Юлай Ильясов билдәләүенсә, ошо көндәрҙә республика законына үҙгәртеүҙәр индереп, өс һәм унан да күберәк бала ҡараған ғаиләләргә бушлай ер участкалары биреү мәсьәләһе хәл ителеү өҫтөндә.

➔ Үҙ өйөмдә - үҙ көйөм, тигәндәй, кемдең генә йортло булғыһы килмәһен! Яңыраҡ үҙәк гәзиттәрҙең береһендә хәбәр ителеүенсә, торлаҡ менән тәьмин ителеш буйынса беҙҙең республика Рәсәйҙә ни бары 56-сы урында тора икән... Бурыс - кисекмәҫтән бындай хәлдән сығырға. 2011-2015 йылдарға торлаҡ төҙөлөшөн дәртләндереү буйынса республика программаһы ошо көндәрҙә Мәскәүҙә хуплау тапты. Был программала ҡаралыуынса, беҙҙә ғәйәт ҙур төҙөлөш башланмаҡсы һәм унда ҡаралған темптар менән берәй 10 йылдан Башҡортостандағы һәр кешегә йылына бер квадрат метр торлаҡ төҙөү күҙҙә тотола, йәғни был әлеге күрһәткестәрҙән ике тапҡырға күберәк буласаҡ, тиген һүҙ. Был йәһәттән республика үҙ өҫтөнә бик яуаплы бурыс ала: яҡындағы биш йыл эсендә 13,7 миллион квадрат метр торлаҡ төҙөү Рәсәйҙә Мәскәү өлкәһе менән Краснодар крайынан ҡала өсөнсө урынды биләйәсәк.

Республиканың торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж кешеләре йылына 6 процент ташлама менән ипотека алыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Банк проценттары менән айырма республика ҡаҙнаһынан ҡаплатыласаҡ. Ошо маҡсаттарҙа киләһе 2011 йылда уҡ 340 миллион һум аҡса бүлеү ҡарала.

➔ Сәнәғәтебеҙ өлкәһендә лә күңелгә өмөт орлоғо һалыусы изге хәбәрҙәр етерлек: Башҡортостан предприятиелары кризисҡа тиклемге кимәлгә ҡайтыуға өлгәште, һөҙөмтәлә республика бюджетына көтөлгәндәгенән күберәк аҡса төштө. Мәҫәлән, "Башнефть" акционерҙар компанияһында өсөнсө кварталда тулайым табыш былтырғы менән сағыштырғанда 3,6 тапҡырға, Өфө нефть эшкәртеү заводында - 2,6, Өфө моторҙар производство берекмәһендә - 1,3 тапҡырға артты. "Салаватнефтеоргсинтез"да - саф табыш 2,2 миллиард һум тәшкил итте. Башҡа предприятиеларҙа ла йәнләнеш һиҙелә.

➔ Киләсәктә икмәк өсөн дә хафаланырға түгелдер, моғайын, сөнки ҡоролоҡ эҙемтәләрен бөтөрөүгә Федераль ҡаҙнанан сентябрҙә 3 миллиард 80 миллион һум күләмендә аҡса бүленде. Уның өстән бер өлөшө самаһы миҙгелле ауыл хужалығы эштәрен үткәреүгә субсидиялар рәүешендә китһә, ҡалған өлөшө ауыл хужалығы продукцияһы етештереүселәргә мал аҙығы әҙерләү, һатып алыуға киткән сығымдарын ҡаплауға тотонолдо. Бығаөҫтәп, Рәсәй Хөкүмәте бойороғо, РФ Хөкүмәте һәм РФ Финанс министрлығы араһындағы Килешеү буйынса ҡоролоҡтан зыян күргән төбәктәр бюджетының тигеҙлеген тәьмин итеү буйынса сараларға ярҙам итеү маҡсатында республикаға Федераль бюджеттан 459,045 миллион һум күләмендә дотация бүленде. Яҡын арала РФ Хөкүмәте төбәктәргә йәнә бер транш йүнәлтергә ниәтләй: Башҡортостанға 406 миллион һум аҡса бүлеү ҡаралған. Тимәк, киләһе йыл уңышына нигеҙ һалына, тиген һүҙ. Тик ошо сараларҙы аҡлап сығыу өсөн ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәренә маңлай тирен һыпырып эшләргә тура киләсәк. Фәҡәт шулай, сөнки эше барҙың ғына ашы бар.

➔ Хуш, өйлө лә, көйлө лә, эшле лә, ашлы ла булдыҡ, ти, шөкөр. Шулай була ҡына күрһен. Инде бер аҙ кешесә донъя, ер-һыу күреп, башты күтәреп, ян-яҡҡа ҡарап бер аҙ ял итеп алырға ла форсат тыуып тора, иншалла. "Социаль туризм" тигән программа килеп сыҡҡан бит, ишеттегеҙме әле? Ишетһәгеҙ ҙә, тағы бер ҡабатлап, иҫегеҙгә төшөрөп китәйек, сөнки бик тә күңелгә ятышлы яңылыҡ ул.

Оло йәштәгеләрҙең, пенсионерҙарҙың һәм инвалидтарҙың туристик путевкаларын компенсациялауға республика бюджетынан 37-38 миллион һум самаһы аҡса бүленәсәк. Путевкаларҙың 60-70 проценты - Башҡортостандың турист маршруттары, 20-30 проценты - Рәсәй буйлап, ҡалған 10 проценты сит илдәргә ҡаралған. Ошо программаға ярашлы, йылына 3 мең самаһы социаль турист сәйәхәт итә аласаҡ. Иң ҡиммәт турҙың хаҡы 20 мең һумдан артырға тейеш түгел. Сәйәхәтселәр путевка хаҡының 30 процентын ғына түләйәсәк, ҡалғаны компенсациялана. Дөрөҫ, был әлегә проектта ғына. Ә шулай ҙа өмөтләндерә. Республикабыҙҙа социаль туризмды үҫтереүҙе БР Президенты Рөстәм Хәмитов башлап ебәрҙе, идеяны Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев хуплаты бит.

➔ Президентыбыҙ Рөстәм Хәмитовтың тағы бер күңелгә майҙай ягылған матур һәм изге фекере 2011 йылда тулы көүәләнеш табыр, тиген өмөтләбеҙ. 16 декабрҙә Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондарының социаль-иктисади үҫешенә арналған кәңәшмәлә Рөстәм Хәмитов Салауат районында яңы туристик зона булдырыу тураһында белдерҙе. Тыуған яҡты өйрәнеү маршруты башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаев тыуып үҫкән урындарҙан үтергә тейеш, тине президент. "Ул - башҡорт халҡының мәшһүр тарихи шәхесе. Республика халҡы ла, төньяҡ-көнсығыштағы шифаханаларыбыҙға ял итергә килеүселәр ҙә сәйәхәт итерлек тулы ҡиммәтле туристик маршрут булдырырға тейешбеҙ", - тине Президентыбыҙ.

**Бирһен Хоҙай, бына ошондай матур өмөттәр ысынбарлыҡҡа ашһын, тормошобоҙ матди йәһәттән генә түгел, рухи яҡтан да байыһын. Дөрөҫ, юрауҙар һәм фаразлауҙар ҡәтғилектә өнәп етмәй етеүен, ләкин беҙ нигеҙе нык булған ышаныслы хәбәрҙәргә генә таяндыҡ. 2011 йылда уларҙың реаль көүәләнеш алыуы һәр беребеҙҙең тырышлығына, тормошто, илебеҙҙе, еребеҙҙе һөйөүенә, ижад сәменә бәйле буласаҡ.**



Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ РФ Социаль страховка фондының төбәк бүлексәһендә Яңы йыл байрамы алдынан производствола эшләгәндә зыян күргән һәм профессиональ сирҙәр арҡаһында инвалид булып ҡалған кешеләргә ВАЗ автомобилдәре тапшырылды. Бығаҡтиклем инвалидтарға "Ока"лар тапшырыла ине, хәҙер уларҙы ВАЗ-дың бишенсе моделе алыштырҙы. 2009 йылда ошондай автомобилдәр республикала 124 кешегә тапшырылған.

✔ Былтыр йыл башынан пенсионерҙарҙы тәьмин итеүҙең яңы социаль төрө - пенсия күләмен төбәктә пенсионерҙар өсөн йәшәү минимумы дәүмәленә еткереүҙе индереү халыҡты яҡлауҙың мөһим сараһы булды. Республикала федераль социаль өҫтәмәне 77611 пенсионер ала. 2011 йылда пенсияға социаль өҫтәмәне билдәләү өсөн йәшәү минимумы дәүмәле 4571 һум күләмендә билдәләнде. Әле ул -3939 һум. 2011 йылдың 1 ғинуарынан айлыҡ аҡсалата түләүҙәрҙе, өҫтәмә айлыҡ матди тәьмин итеүҙәрҙе, пенсияны, башҡа социаль ярҙам сараларын иҫәпләгәндән һуң дөйөм сумма 4571 һумдан кәмерәк була икән, пенсияға өҫтәмә тейш. Алдан иҫәпләүҙәр буйынса, йәшәү минимумының яңы күләмен иҫәпкә алып, федераль социаль түләүҙәргә 1 ғинуарҙан төбәктәге 126561 пенсионер хоҡуҡлы.

✔ Эш башларға теләгән эшҡыуарҙарға хәҙер еңелерәк буласаҡ: Хөкүмәт башланғыс финанс ярҙамын тағы ла 200 мең һумға арттырырға ҡарар иткән - 2012 йылдан үҙ фирмаһын асырға теләгәндәргә 500 мең һум аҡса бүленәсәк. 750 бәләкәй һәм урта бизнес предприятиеһы дәүләт ярҙамына өмөт итә ала. Был ниәт бойомға ашырылған хәлдә 300 эш урыны барлыҡҡа киләсәк. Бынан тыш, 2011 йылдың ғинуарында "Бизнес всеобуч" программаһы буйынса республикала 240 бизнес класы асыласаҡ. Унда юридик мәсьәләләр, тергәлеү, һалымдар, тикшереүҙәр һәм башҡалар тураһында һөйләйәсәктәр, бизнес-план төҙөргә өйрәтәсәктәр.

✔ Ғинуарҙа Мәсетле районында кумыҙсылар һәм өзләүселәр конкурсы үтәсәк. Ә 2-4 мартта был конкурс төбәкара кимәлдә ошо уҡ районда үткәреләсәк.

✔ Бығаҡтиклем Конгресс-холда директор булып эшләүсе Рәсүл Ҡарабулатов хәҙер Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһын етәкләйәсәк.

✓ *Францияла "шыршылар" күргәҙмәһе ойошторолған. Яңы йыл символын ниндәй генә материал менән һынландырмағандар унда! Бигерәк тә пластик шешәнән эшләнгәне күптәрҙең иғтибарын йәлеп иткән.*



## ЕТЕ РАЙОН

**Дим.** Район Яңы йыл кейемен "кейҙе" - магазиндарҙың, ойошмалар һәм предприятиеларҙың фасадтары төрлө төҫтәрҙә балҡый, хоккей "ҡумталары" асылды, шыршылар ҡуйылды. Әммә иң мөһиме - парктағы йәшел һылыуҡай. Ундағы боҙ ҡаласығы тантаналы асылған көндө "Башҡортостан пионерҙары" сафына 500 өсөнсө синыф уҡыусыһы ҡабул ителде. Уларҙы паркта Винни-Пух һәм уның дуҫтары, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу ҡотланы.

**Совет.** Уҡыусылар араһында хоккей буйынса Яңы йыл кубогына ярыш уҙғарылды. Унда алты команда ҡатнашты. Сара уҡыусыларҙы физик культураға йәлеп итеп кенә ҡалманы, сәләмәт тормошто әүҙем пропагандаланы, перспективалы йәш спортсыларҙы асыҡланы һәм уларҙың оҫталығын арттырыуға ярҙам итте.

**Киров.** М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр балалары өсөн Яңы йыл тамашаһы ойошторолдо. Балалар барыһы ла сағыу костюмдарҙа - кем әкиәт геройы, кем мушкетер, кем рыцарь, принцесса булып килде. Район шыршы байрамында 600 бала һәм уларҙың ата-әсәһе ҡатнашты. Сара һуңында балалар татлы күстәнәстәр алды.

**Калинин.** Моторҙар эшләү берекмәһе Мәҙәниәт һарайы ҡаршыһында район шыршыһын асыу тантанаһынан башланған Яңы йыл байрамдары Инорс, Шаҡша биҫтәләрендә лә дауам итте. Төп майҙанда иң яҡшы "Боҙ ҡалаһы"на һәм "Әкиәти боҙ" ҡар-боҙ скульптуралары конкурсы үтте.

**Октябрь.** Барлыҡ ҙур майҙандарҙа боҙ ҡаласыҡтары асылды, мәктәптәрҙә иртәлектәр, дискотекалар, кисәләр уҙғарылды. "Ҡышҡы әкиәт" социаль акцияһы сиктәрендә инвалид балаларға бүләктәр тапшырылды, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙең балалары тәбрикләнде, улар өсөн бушлай кинолар, спектаклдәр ҡуйылды.

**Орджоникидзе.** 13 ғинуарға тиклем Ҡала мәҙәниәт һарайында байрам саралары уҙғарыла. Химиктар мәҙәниәт һарайында Раштыуа концерты булды. Шул уҡ көндө "Дуҫлыҡ" мәҙәниәт һарайы иң бәләкәйҙәр өсөн Яңы йыл йәнһүрәттәре күрһәтте.

**Ленин.** "Затон" биҫтәһендә, Нижегородкала йәшәгән имен булмаған һәм ауыр тормош һынауҙары алдында ҡалған ғаиләләрҙә тәрбиәләнеүсе балалар өсөн социаль шыршы байрамы ойошторолдо. Балаларға 4-се урта мәктәп уҡыусылары, Мәскәү дәүләт һыу транспорты академияһының Өфө филиалы студенттары, Балалар ижады үҙәгендә шөғөлләнеүселәр төрлө сюрпризлар әҙерләне, "Беҙҙең балалар" коммерция булмаған мәрхәмәтлек фонды йомшаҡ уйынсыҡтар һәм тәмләкәстәр таратты.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР*

# ӨС КӨНЛӨК ЙӘМ ӨСӨН...

## күпме шыршы ҡырҡыла

**Һуңғы йылдарҙа тәбиғәт көйһөҙләнә башланы. Ҡышы ҡышҡа, йәйе йәйгә оҡшамаған. Йәйен бер тамсы ямғыр һыуына мохтаж булһаҡ, ҡышын ҡар яуғанын түҙемһеҙләнеп көтөргә мәжбүрбеҙ. Ҡар тигәндәй, тиҫтә йылға яҡын инде ҡарҙың декабрь уртаһында ғына яуыуы ғәҙәти күренешкә әйләнде. Был, әлбиттә, Яңы йыл шыршыларын биҙәү эштәренә аяҡ салыңҡырай. Ни тиһәң дә, халыҡ Яңы йыл шыршылары ҡуйылған майҙандағы боҙ һындарҙа ниндәйҙер сихрилыҡ, йәм күрә бит.**

Өфө майҙандарындағы Яңы йыл шыршылары эргәһендә булғанда быйыл да боҙға ҡытлыҡ кисерелгәне бер аҙ һиҙелә һиҙелеүгә. Элек шыршы тирәләй булған бар һындар, уратмалар ҙа боҙҙан ғына ҡойола торғайны. Әле уратмаларҙың ҡайһы берҙәре фанера таҡтанан яһалып, төрлө һүрәттәр менән биҙәкләнгән.

Ленин майҙанында ла, Салауат Юлаев, Совет майҙанында ла был көндәрҙә һине ҡупшы шыршылар ҡаршылай. Әйтерһең, ысын әкиәт донъяһы! Бар майҙансыҡтарҙың да түренә бейек шыршы менеп ҡунаҡлаған. Һоҡланып баҡҡанда, уларҙың нисә йәштә икәнен уйлаймы икән кеше? Бик өлкән йәштә бит инде улар: 50, 80, 100 йәштә лә булырға мөмкиндәр. Бер ай самаһы майҙанды биҙәп, халыҡтың күҙен ҡыҙҙырып ултыра ла улар, шунан кәрәкһеҙгә әйләнә...

Боҙға мохтажлыҡ булғас, һындар эшләү өсөн ағасты файҙаланырға өйрәндек. Киләсәктә, бәлки, ошо йәшел шыршыларҙы алыштырырҙай сара ла уйлап табылмаҫмы икән? Хәҙер күп илдәрҙә шыршыға алмаш эҙләйҙәр бит. Бына, мәҫәлән, Францияла ошо көндәрҙә "шыршылар" күргәҙмәһе ойошторолған. Яңы йыл символын ниндәй генә материал менән һынландырмағандар унда! Бигерәк тә пластик шешәнән эшләнгәне күптәрҙең иғтибарын йәлеп иткән һәм беренсе урын алған. Бәлки, беҙгә лә француз дуҫтарҙан өлгө алырға кәрәктер.

Беҙ тәбиғәттең бер өлөшө булһаҡ та, йәнәшәбеҙҙәге ошо "туғаныбыҙға" аяуһыҙ мөнәсәбәт күрһәтеүҙе дауам итәбеҙ. Шуға ла тәбиғәт беҙгә йә ҡоролоҡ, йә һыу ташыуҙар, йә башҡа фажиғәләре менән яуап бирә тора. Һәр Яңы йыл алдынан миллионлаған төп шыршыны ҡырҡыу ҙа аяуһыҙлыҡ ул. Быныһына ла тәбиғәт урмандарыбыҙҙы ҡоротоу менән яуап бирмәгәйе...

**Данил ӘБДЕЛҒАЗИН.**



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# АТА-ӘСӘ БЕЛҺЕН

**Башҡортостанда бәлиғ булмағандар өсөн комендант сәғәттәре эшләп килә. 18 йәше тулмаған балаларға төндәрен йәмәғәт урындарында йөрөргә ярамағанлығы тураһындағы үҙгәртеүҙәр уҙған йылдың июлендә үк "Бала хоҡуғының төп гарантиялары тураһында" БР Законына индерелде.**

Ләкин тәжрибә күп ата-әсәләрҙең һәм балаларҙың әле һаман яңы тәртип тураһында белмәүен күрһәтә. Башҡортостан Республикаһының Премьер-министр урынбаҫары Зөһрә Рәхмәтуллина фекеренсә, киләсәктә был ҙур күңелһеҙлектәргә алып киләсәк.

- Яҡын арала республикала "балалар сәғәтен" боҙоусыларға аҡсалата түләүҙәр ҡараған Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодекс ҡабул ителәсәк, - тип билдәләп үтте вице-премьер БР Хөкүмәтендә үткән бәлиғ булмағандар һәм уларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса комиссия ултырышында. - Комендант сәғәттәрен күбеһенсә насар ғаиләлә үҫкән балалар боҙа. Бындай ғаиләләрҙә штраф түләр өсөн артыҡ аҡса булмауы билдәле. Шуға күрә беҙ ата-әсәләрҙе лә, балаларҙы ла иҫкәртергә тейешбеҙ. Административ яуаплылыҡҡа тарттырыу уларҙың кеҫәләренә ныҡ ҡына һуғасаҡ, был хаҡта улар белергә тейеш.

Булыуы мөмкин конфликтлы хәлдәрҙең һанын кәметеү өсөн ултырыш ваҡытында министрлыҡ, идаралыҡ, республиканың район һәм ҡала хакимиәттәре етәкселәренә яңы закондың үҙ көсөнә инеүе, уның положениелары тураһында мәғлүмәттәр еткереү тураһында төрлө саралар уҙғарырға ҡушылды.

# ЯҢЫСА ТҮЛӘҮҘӘР

**2011 йылдың 1 ғинуарынан ауырыу ҡағыҙҙарына түләү буйынса яңы ҡағиҙәләр үҙ көсөнә инә. Был ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ буйынса пособиеға, шулай уҡ декрет отпускыһына киткән ҡатын-ҡыҙҙарға тейешле түләүҙәргә лә ҡағыла.**

"Ваҡытлыса эшкә һәләтлекте юғалтыу һәм бала табыу сәбәпле мотлаҡ социаль страховка тураһындағы" Закон проекты ике палата парламенты менән дә хупланған һәм декабрь башында РФ Президенты Дмитрий Медведев тарафынан ҡул ҡуйылған. Законға ярашлы, яңы йылдан башлап декрет отспускыһына социаль түләүҙәр, элекке кеүек бер йылғы түгел, ә ике йылғы сығымдарҙан алып иҫәпләнә, йәғни, әгәр буласаҡ әсә балаһын 2011 йылдың йәйенә тыуҙырырға йыйынһа, уға уртаса түләүҙәрҙе уның 2010 һәм 2009 йылғы эш хаҡтарынан сығып иҫәпләргә тейештәр. Күптәрҙең фекере буйынса, яңы закон ике йыл эш стажы булып өлгөрмәгән йәш ғаиләләрҙең, икенсе балаһын беренсе балаһынан һуң ике йыл да үтмәйенсә табырға йыйынған ҡатындарҙың кеҫәһенә һуғасаҡ.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры Төркиәнән "Мең һулыш һәм бер тауыш" тип аталған IV халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестиваленә саҡырыу алды. Театр фестивалгә "Әхмәтзәки Вәлиди Туған" спектаклен алып барасаҡ. Сара апрелдең икенсе яртыһында Конья ҡалаһында үтә.

✓ 4 ғинуарҙа Ерҙең күп өлөшөндә ҡояш тотолоуын күҙәттеләр. Ер юлдашы күләгәһе ҡояшты 80 процентҡа тиклем ҡапланы. Ҡояш тотолоу Өфөлә 13.05 сәғәттә башланды. Киләһе ҡояш тотолоу 2015 йылдың 20 мартында көтөлә.

✓ Өфө приборҙар эшләү производство берекмәһе өсөн 2010 йыл "Ағиҙел" электр ҡырынғысы етештереүҙе яңыртыу йылы булып иҫтә ҡаласаҡ. Баҙарҙа был тауарға һорау юғары килеш ҡала, сөнки ул юғары сифатлы булыуы һәм оҙаҡ хеҙмәт итеүе менән айырылып тора. Ул оҙаҡ йылдар абруйлы күргәҙмәләрҙә, конкурстарҙа ҡатнашып, миҙал һәм дипломдар яулай килде. Хәҙер "Ағиҙел" электр ҡырынғысы төрлө модификацияларҙа етештереләсәк.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән яҙыусы Ғиниәтуллин Талха Йомабай улына (әҙәби псевдонимы -Генатулин Анатолий Юмабаевич) Башҡортостан Республикаһының халыҡ яҙыусыһы тигән маҡтаулы исем бирелде.

✓ Өфөнөң Максимовка ҡасабаһындағы "Нәсихәт" ислам реабилитация үҙәгендә былтыр 18 наркоманды дауалауға өлгәшкәндәр. Үҙәктең етәксеһе Нурмөхәмәт Нуриев әйтеүенсә, йыл дауамында үҙәктә йөҙгә яҡын эскесе һәм наркоман реабилитация үткән, уларҙың 30-лабы алама ғәҙәтенән арынып, ғаиләләренә ҡайтҡан, эшкә урынлашҡан. Үҙәк ҡалғандарҙың яҙмышын да күҙәтеү аҫтында тота. Әле реабилитация үтеүселәрҙең ҡайһы берҙәре Салауат районындағы филиалда социаль адаптацияла, ә үҙәктә иһә яңы төркөм туплана.

✓ Быйылдан башлап Рәсәйҙә 100 ваттан ашыу ҡеүәтле электр лампаларын һатырға рөхсәт ителмәйәсәк. Бындай ҡәтғи саралар рәсәйлеләр энергияны һаҡсыл тотоноусы лампочкалар ҡулланһын өсөн индерелә.

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ

# БЕЛЕМЛЕЛЕК - АРЫҪЛАНДАЙ КӨСЛӨ БАТЫР,

## шуға атланмай, һинең төшөң һис өн булмаҫ



**Былтыр "Киске Өфө" Республика йылына арнап мәктәп уҡыусылары һәм студенттар араһында "Башҡорт телендә һөйләшәм" тигән конкурс иғлан иткәйне. Маҡсаты - балаларҙа, йәштәрҙә туған телдә матур итеп һөйләшеүгә, уйҙарыңды, фекерҙәреңде тейешле тәртиптә теҙеп, дөрөҫ һөйләмдәр ҡороп яҙырға өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу.**

Йыл дауамында конкурсҡа байтаҡ ҡына хаттар килде. Йәрмәкәй районы Түбәнге Ҡарамалы мәктәбенән 8-се синыф уҡыусыһы Сөмбөл Йәғәфәрова, 9-сы синыф уҡыусыһы Лилиә Кашапова, Ҡырмыҫҡалы районы Шәрипҡол ауылынан 9-сы синыф уҡыусыһы Раиса Грабовская, Мәләүез районы Ҡотош урта мәктәбенең 5-се синыф уҡыусылары Дания Собханғолова менән Диана Әлмөхәмәтова, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан Л. Ишемғолова, 3-сө Стәрлетамаҡ Башҡорт лицей-интернатының 10-сы синыф уҡыусыһы, Ишембай егете Айбулат Мәксүтов, Баймаҡ районы Ниғәмәт мәктәбенең 6-сы синыф уҡыусыһы Нәйлә Заманова, Өфө ҡалаһының 141-се урта мәктәбенең 10-сы синыф уҡыусыһы Зөлфиә Мәрҙәнова, Ишембай районы Яңы Әптек урта мәктәбенең 10-сы синыф уҡыусыһы Эльмира Абдуллина, 8-се синыф уҡыусыһы Эльза Яҡупова, Әбйәлил районы Туйыш ауылынан 10-сы синыф уҡыусыһы Нәркәс Миңлебаева, Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһынан Зөһрә Баймөхәмәтова, Салауат педагогия колледжы студенты Әлиә Теләүбирҙина, Ейәнсура башҡорт гимназияһының 10-сы синыф уҡыусыһы Ләйсән Ҡыуатова, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатынан Зилиә Хунафинаға туған телгә битараф булмағаны һәм беҙҙең конкурста ҡатнашҡаны өсөн "Афариндар!" тибеҙ. Халҡыбыҙҙа "Булыр бала бишектән" тигән мәҡәл бар, киләсәктә һеҙҙең республикабыҙ, милләтебеҙ, телебеҙ һағында тороусылар рәтендә буласағығыҙға шигебеҙ юҡ.

Бәйге булғас, уның еңеүселәре лә булырға тейеш. "Киске Өфө" гәзите мөхәрририәте Әбйәлил районы Байым урта мәктәбе уҡыусыһы Нәркәс Миңлебаеваны, Ейәнсура башҡорт гимназияһының 10-сы синыф уҡыусыһы Ләйсән Ҡыуатованы, шулай уҡ баш ҡаланың М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Зөһрә Баймөхәмәтованы (иғтибар итегеҙ: түбәндә уның мәҡәләһе киләсәктә конкурста ҡатнашасаҡ балаларға яҙма өлгөһө булараҡ тәҡдим ителә) "Башҡорт телендә һөйләшәм" конкурсының 2010 йылдағы еңеүселәре тип тапты. Уларға, вәғәҙә ителгәнсә, кеҫә телефондары бүләк ителә.

**ШУЛАЙ ҘА...**

**Конкурс шартына ярашлы, дөйөм һүҙҙәр, тапалған фекерҙәр ҡулланмай, уҡыусыны уйландырырлыҡ итеп яҙылған эштәрҙең иҫәбе артыҡ күп булманы. Арағыҙҙа туған телендә матур итеп һөйләшә, фекерҙәрен аҡ ҡағыҙға төшөрә белеүсе уҡыусылар, студенттар бар икәнен беләбеҙ. Шуға ла "Киске Өфө" гәзите был конкурсты быйыл да дауам итергә булды. Шарттар ҙа элеккесә ҡала: конкурста ҡатнашырға теләүселәр редакция тәҡдим иткән темаға инша-мәҡәлә йәки үҙе теләгән жанрҙа - әкиәтме, шиғырмы һ.б. яҙа. Фекерләү ихлас, төплө, үҙенсәлекле булырға тейеш. Яҙманы үҙаллы, ата-әсә йәки уҡытыусы ярҙамынан тыш башҡарырға кәрәклеген дә иҫегеҙгә төшөрөп үтәбеҙ.**

**Был юлы һеҙгә шундай тема тәҡдим ителә: "Белемлелек - арыҫландай көслө батыр, шуға атланмай, һинең төшөң һис өн булмаҫ". Аҡмулла бабағыҙҙың ошо һүҙҙәренә эйәреп, белем алыуҙың әһәмиәте, үҙегеҙ өйрәнергә теләгән фән донъяһы тураһында яҙмаларығыҙҙы көтәбеҙ. Еңеүселәргә - кеҫә телефондары!**

# АҠЫЛЛЫ ЕГЕТТЕҢ...

## ерһеҙ ҡалыуҙан ҡотҡарғаны

**Бик боронғо ла түгел, шулай уҡ беҙҙең быуатта ла булмаған был хәл. Таулы ауылында бер ҡарт менән ҡарсыҡ йәшәгән, ти. Уларҙың өс малайы булған. Өлкәнен Батырйән тип исемләгәндәр. Исеменә күрә - есеме, тигәндәй, ул бер йәнлектән дә ҡурҡмаған, һунарға йөрөргә яратҡан. Тора-бара был һөнәргә үҙ улдарын да йәлеп иткән. Тирә-яҡҡа уның даны тиҙ таралған, сөнки йәнлек аулау ғына түгел, уларҙы үрсетеп, тире эшкәртеү менән дә шөғөлләнә башлаған. Ә уртансы улдарының, Һөнәрғолдоң, бала саҡтан уҡ ағас эшенә ынтылышы матур өйҙәр һалырға өйрәнеүгә килтерә. Һырлап, юнып эшләнгән өйҙәр тирә-яҡҡа йәм биреп, бар ауылды матурлап ултырған. Уның даны ла ситкә таралған, ти.**

Ағаларының уңышына ҡарап, ҡустылары Мөҙәристең дә дан яулау теләге уянған. Зирәклеге, тапҡырлығы, белемгә булған ынтылышы менән ул ағаларына ҡарағанда өҫтөнөрәк булған булыуын. "Мин киләсәктә ҙур кеше буласаҡмын, үҙемә йәнем теләгән нәмәне һатып аласаҡмын, сит ерҙәргә сәйәхәт итәсәкмен", - тип әйтер булған Мөҙәрис. Ағалары уға ҡарап: "Һин нисек ҙур кеше булмаҡсыһың? Бер нәмә лә эшләй белмәйһең бит. Бына Батырйәндең ҡулында - мылтығы, кәртәһендә - мал-тыуары бар. Ә минең ҡулымда балта уйнап тора. Беҙ ҡайҙа барһаҡ та эш табасаҡбыҙ. Ә һин нисек дан ҡаҙанырға йыйынаһың? Китап тотоп ултырып, өй төҙөмәҫһең, мал үрсетмәҫһең. Суҡып ҡарға булмаҫһың, уҡып мулла булмаҫһың ", - тип көлгән, ти.

Бер саҡ Мөҙәрис ҡалаға йыйына башлаған. Уның ҡала мәктәбендә уҡырға теләге бик ҙур булған. Ағалары һәм ата-әсәһе Мөҙәристе ҡалаға оҙатҡан. Кинйә малай хаттар яҙған, тик ғаиләлә бер кем дә уҡый белмәгәс, ял көндәрендә ауылға ҡайтҡанында үҙ хаттарын үҙенән уҡытҡандар, ти.

Ваҡыт үтә, Мөҙәрис мәктәпте тамамлай. Күрше илдәге мәҙрәсәгә уҡырға китә. Мәҙрәсәне тамамлағас, ҡалала балаларға ғәрәп телен өйрәтә башлай. Бик шәп уҡытыусы сыға унан. Һәләтле егетте сит илдән килгән бер батша күреп, уның аҡылына хайран ҡала, ти. Үҙ батшалығына саҡырғас, Мөҙәрис риза була, ти.

Аҙмы-күпме ваҡыт үткәс, Мөҙәрис сит илдә лә яҡшы уҡытыусы булараҡ танылa. Уның хаҡындағы хәбәр тыуған яҡтарына ла килеп еткәс, ағалары һәм ата-әсәһе лә ҡыуана, ти.

Берҙән-бер көндө батша һарайында Мөҙәрис шундай бер күренешкә тап була: аҫыл ҡош үҙенең балаларын осорға өйрәтә, ти. Шул саҡ ул да үҙенең тыуған яҡтарын иҫенә төшөрә, хатта күңеле тулып китә. Атаһының "Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул" тигән һүҙҙәрен иҫләп, тылсымлы көҙгө аша ауылын ҡарарға була. Ҡараһа, ни күрә: егеттең тыуған ауылындағы ерҙәргә сит-яттар килеп тулған, ауылдаштары, туғандары уларға батраклыҡҡа ялланған, ти. Быны күргәс, егет тиҙ генә сумаҙандарын йыйған да ҡайтыр юлға сыҡҡан. Уның ауылында борон-борондан аҫабалыҡ ҡағыҙы һаҡланған булғанын белгән ул. Шул ҡағыҙҙы эшкә ебәреп, юллап, яңы документтар тултырып, бар ауыл халҡының ерен һаҡлап алып ҡалған, ти. Мөҙәристе ауылдаштары аҡһаҡалдар ҡоро башлығы итеп һайлап ҡуйған. Ошонан һуң ул ауыл халҡына аң-белем таратып, иманға күндерерп, уларға үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алыуға, үҙ ерҙәренә үҙе хужа булыуға юл асҡан, ти.

**Был яҙғанды уҡығас, һәр кем алғандыр һабаҡ. Элек булған был хәлдәр бөгөнгөләргә ишара һымаҡ.**

**Зөһрә БАЙМӨХӘМӘТОВА.**
**М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡыусыһы.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Йәшел сирәм



Йонсоған, йоҡоһоҙлоҡтан интеккәндә ысыҡлы йәшел сирәмдә ялан аяҡ йөрөү физик яҡтан да, рухи йәһәттән дә кешене сыныҡтыра. Был бигерәк тә бала-сағаға файҙалы. Үләндә тәүҙә 7 мәртәбә сәғәт теле ыңғайына, шунан кирегә йөрөү шифалы. Был ысулды хәтер һандығығыҙға һалып ҡуйығыҙ һәм йәшел йәй етеү менән ҡулланығыҙ.

## Геморрой

❖ 2 ҡалаҡ шыттырып киптерелгән арпаны иҙгеләп, 1 литр ҡайнар һыуҙа бешерергә һәм 4 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 мәртәбә яртышар стаканлап эсергә.

❖ 1 стакан тоҙло кәбеҫтә һыуын йылытып эсергә.

## Сейә

Һәр миҙгелдең үҙ йәме, шулай ҙа кеше ҡыш йәйҙе, йәй ҡышты һағыныусан була. Бына әле күңелде тамшатып, ҡырағай сейә иҫкә төштө. Сейә витаминдарға, һәр төрлө кислоталарға бай. Шуға ла ул аҙ ҡанлылыҡтан, үпкә, бөйөр ауырыуынан, атеросклероздан яфаланыусыларға файҙалы. Ә сейә һыуы дизентерияға килтереүсе бактерияларҙы үлтерә. Шуға ла сейәне күпләп ашағыҙ.

## Аҙ ҡанлылыҡ

❖ Көнөнә 1 тырнаҡ һарымһаҡ ашау файҙалы; ❖ Әгәр ҙә һарымһаҡты шул көйө ашай алмаһағыҙ, төнәтмә яһарға була. 300 грамм һарымһаҡты таҙартып, йыуып, быяла һауытҡа тултыраһың һәм өҫтөнә таҙа спирт ҡойоп, 3 аҙна тотаһың. Ярты стакан һөткә 20-шәр тамсы тамыҙып, көнөнә 3 мәртәбә эсәһең; ❖ Һауытҡа 20-30 грамм сөгөлдөр һуты һығып алғас, өҫтөнә 150-200 грамм алма һуты һығырға һәм болғатып шунда уҡ эсергә кәрәк. Көн һайын ашар алдынан 2-3 мәртәбә эсһәң, ҡан арта, гемоглобин етмәүҙән дә файҙалы.

## Ҡурылдай

2 ҡалаҡ әнис (укроп) орлоғон, 1 балғалаҡ балды, бер семтем тоҙҙо бергә болғап, өҫтөнә 200 мл ҡайнаған һыу ҡойорға һәм йылы көйөнсә ике сәғәт һайын 2 ҡалаҡ эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ ***Матур-матур ялтыр төргәктәрҙәге, эт-бесәй ашамаҫ сит ил утиленә ҡалмаҫмы көнөбөҙ? Вискастан башлап бөтә ҡалдыҡ-боҫтоҡто беҙгә ебәреп ултырған илдәр араһында, донъя киңлегендә баһабыҙ күпме булыр икән?***



*ХӘТЕРКИТАП*

# БИГЕН АСАЙЫҠСЫ...

## хәтер һандығының

**Өләсәйем күргән-белгәндәрен, башынан үткәндәрен теҙә лә теҙә. Ә мин ишеткәндәремде күңел һөҙгөсөнән үткәрәм. Тыңлағанымдарҙың бары ла һыя күңелгә, хәтер һандығына төшә бара. Үҫермен дә тарих итеп яҙырмын, тигән инем дә. Иншалла, Алла бирһә, тимәгәнмен шул. Хәтер һандығының биге була икәнлеген белмәгәнмен. Яҡты көн һорап тулағандарын аҡҡа төшөрөр инем дә, ярым-ярты иҫтәлектәрҙән ҡорама ҡорғом килмәй. Күңел өнһөҙ һыҡтай ҙа, йөрәк өнһөҙ ҡысҡыра. "Өләсәй-олатайҙарығыҙ, атай-әсәйҙәрегеҙ менән күпме хәтер һандыҡтарын ерләнегеҙ", - тип, "Ни саҡлы хазинаны ергә күмдегеҙ", - тип набат һуға. Һис юғы, хәтер төйөндәренән мәрйен булһа ла теҙәйем әле. Өләсәйемдән, атай-әсәйемдән, инәй-бабайҙарымдан, апай-ағайҙарымдан ҡалған хәтер сарпыуҙарын йыйып, һандыҡ эшләйем. Иншалла, уны ергә күмдермәйем.**

Ярҙан-ярға алҡынып Нөгөш аға. Ул әле генә боҙҙан әрселгән. Йәне ҡай ерендә икәнлеге лә беленмәҫ әсә йәнтәслимгә кәмәлә тулҡындар менән көрәшә. Яҙмышын Хоҙайына тапшырып, һыуға ташланыуы юҡҡа түгел. Дарья йотамы, әллә кире сигенәме, барыбер бер үлем. Өйөндә ике ас бәғеркәйе: 6 йәшлек ҡыҙы менән 10 йәшлек улынан башҡа бер кем дә юҡ. Иң йот 21-ҙә лә үлемдән йолоп ҡалған һыйырын яуыздар тәләфләп ҡуйҙылар (унының үҙе бер тарих). Таң һарыһынан төнгәсә колхоз бүлеп биргән ерҙе ҡарҙан әрсеп бөтә алһаң, сайынты һыу бирәләр. Май тасҡағанда сыҡҡан айранын түгел, ә майҙы сайҡатҡан һыуҙы ғына. Көрәп бөтә алмаһаң, унының ла юҡ. Бар йән аҫырағандары - көнөнә берәр бәрәңге. Үҙ тернәклеге менән ошо ят аҙыҡты үҫтермәгән булһа, күптән ер ҡуйынында ятырҙар ине. Өҫтөндәге күлдәге, таяҡҡа эленгәндәй, елберҙәп тора. Ҡураныс кәүҙәһен ел осороп, йәнен күккә ашырыуҙан һаҡлап торғаны - бары әсә фиҙаҡәрлеге генә. Нисек тә балаҡайҙарын күгүләнгә еткереү.

Был тарихсылар әллә ни иҫкә алмай, матбуғатта әллә ни яҡтыртылмай торған 1934 йыл. Халыҡтарҙы халыҡтарға, ауылдаштарҙы ауылдаштарға, туғандарын туғандарына ҡаршы ҡуйып, нәҫел ҡоротоу сәйәсәтенең беренсеһе лә, һуңғыһы ла түгел. Иң тырыштар һеңерен сабып, Себер юлын аҫыл һөйәктәр менән түшәү тирмәне ил буйлап ҡорбандарын йыя.

Әле лә мин аңламайым. Ниңә бер төбәктәр бөтмәҫ донор, икенселәре мәңге дотацияла. Әллә ул төбәктәр тотош ғәрип-ғәрәбәләрҙән торамы? Әллә эт ялҡауы, әрәмтамаҡ, елғыуар, ас бет, ҡандала булып йәшәү отошлораҡмы икән? Өләсәйем, ялҡауҙар ғына ярлы булды, тип һөйләр ине. Граждандар һуғышы мәлендә лә аҡтарҙан бигерәк ҡыҙылдар әсемәк булған да. Әле лә бит бик тырыштар нәһерен әрәмтамаҡтарҙың ҡоротоуы дауам итә. Берәү аҡса таба, икенсеһе янсыҡ тегә. Феодаль ҡоролош тарихҡа ҡалды, тип һөйләй инек. Крәҫтиән быña шунса оброк түләгән, тип, ул ҡоролошто хурлай инек. Әлеге донор төбәктәрҙең түләүе шул оброктан артып китмәйме һуң? Хөкүмәт донор-дотация мөнәсәбәттәрен юғарынан бөтөрмәһә, ҡайһы төбәк үҙ теләге менән дотациянан баш тартырға, донор булырға теләк белдерер икән?

Студент саҡ. Башҡортостандың һәр тарафынан, илдең һәр өлөшөнән йыйылғанбыҙ. Төрлө милләт вәкилдәренән торған "ҡырҡ ата-балаларыбыҙ". Ауылдыҡымы, ҡаланыҡымы - берҙәй ғаилә булып уҡмашып уҡып йөрөйбөҙ. Күңелдәр көр, йөрәктәр асыҡ, уйҙар тик яҡты ғына. Ошондай һил тормошобоҙға юҡ-юҡта "ыу" сәсрәп ҡуя. "Ниңә һеҙгә, ауылдыҡыларға, стипендия түләйҙәр икән, - ти Силәбе ҡыҙы. - Һеҙҙең бит үҙ картуфығыҙ, ит, һөт, майығыҙ бар", - тип ярһый. Күбебеҙ телһеҙ ҡалып, һушын йыя алмай торған арала, Фәниәбеҙ генә һөжүмде ваҡытында туҡтатып ҡуя. "Шул картуф үҫһен өсөн, ит, һөт, май булһын өсөн алһыҙ-ялһыҙ, каникулһыҙ, иртәнән-кискәсә бил бөгәбеҙ", - тип теге ҡыҙҙы урынына ултырта.

Эй, ҡала! Ҡасан үҙеңде туйындырыусы ауылдың ҡәҙерен белерһең икән? Граждандар һуғышынан ауыл башына төшкән йәбер-золомдың туҡтағаны булдымы һуң? Заман үҙгәрә икән, ауыл да үҙгәрмәй ҡалмай. Тик ҡаланың "Һин йәшәй белмәйһең", тип мәңгелек туҡмағы, матһурыуы аҫтында түгел. Бер ауыл кешеһе лә ҡала тормошона ҡыҫылып, аҡыл һатмай. Һәм ауылды ла бөтөрөү программаһын үҙе төҙөмәй. Ауыл үҫкән, ҙурайған, мәле еткәс, кемдәрелер яңы урындарға күсеп, ауылдар һанын ишәйткән. Ниндәйҙер ауыл юҡҡа сыҡһа, уны йә ихтилалдан һуң үртәгәндәр, йә көсләп күсереп, урынын быуаға, ядро полигонына әйләндергәндәр. Ҡайһыныһын ҡала йотҡан. Тик һуңғы 90 йыл эсендә бөткән ауылдар һаны ғына ла иҫәпһеҙ-хисапһыҙ. Кемдер, бәлки, ауылдарҙың "ҡара исемлеген" төҙөр. Әммә, әлегәсә күпме тарихсыға өндәшһәм дә, был эшкә тотоноусы юҡ. Һәр район үҙ биләмәһендә үҙе асыҡламаһа, ғалимдар ғына уның осона сыға алмаясаҡ.

Ауылдарға ойошторолған ҡырғын бер көсәйеп, бер баҫылғандай булһа ла, туҡтағаны юҡ. Хрущевтың "туғыҙынсы валынан" һуң, бына икенсе тулҡын килә. Инде һуңғы ауылдың һеңеренә сабылһа, тәғәмегеҙ нимә булыр? Матур-матур ялтыр төргәктәрҙәге, эт-бесәй ашамаҫ сит ил утиленә ҡалмаҫмы көнөбөҙ? Вискастан башлап бөтә ҡалдыҡ-боҫтоҡто, ашлы һыуын беҙгә ебәреп ултырған илдәр араһында, донъя киңлегендә баһабыҙ күпме булыр икән?

Кем белмәй икән Ленинград блокадаһын. Һәр төшөн үлем шәүләһе ҡаплаған 900 көнлөк тамуҡтан тере йән ҡалыуына хайран-вайран булырһың. Ә бит ауылдың хәле блокаданыҡынан һис тә кәм булмаған. Һуғыш менән башланып, 1418 көндә генә лә тамамланмаған.

Осор бер кемде лә аямаған. Шулай ҙа, ҡалала һәр кемгә тәғәйен норма, һәр көнгә талон булған. Нимә ҡушып бешерһәләр ҙә, ул норманың икмәк тип аталырлыҡ ерлеше булған. Әҙме-күпме баш терәр, серем итер форсаты булған. Ленинград блокадаһы икмәгенең рецебын күптәребеҙ белә лә ул, ауыл икмәгенекен кем белә икән? Ул "икмәктә" нимә булһа булған, тик он әһәре генә булмаған, һәм норма итеп тә бирелмәгән. Бәлки, инәйҙәр ғибрәт өсөн үҙ рецепттарын гәзиткә яҙып та ебәрер әле. Эш менән эш араһында, йәйен үлән эҙләп йән аҫыраһалар, ҡыш бит аслыҡ тотош ғаиләләрҙе салғылай сапҡан. Тамаҡ ялһыҙ эшләү - таяҡтың осо ғына. Икенсеһе, ит, май, йомортҡа тапшырыу йөкләмәһе. Мал көтәһеңме әле, юҡмы, тыумы, һауҙырамы - тапшыраһың. Үтәмәһәң - төрмә. Ерҙә ятҡан бер бөртөк игенде ҡапҡан өсөн дә нәҫелеңде ҡоротоу янай. Үгеҙ, һыйыр йәнәшәһендә екке булып йөрөгән ҡыҙ-ҡырҡын төнөн генә үҙ донъяһын хәстәрләп, малына аҙыҡ әҙерләһен, ҡышҡы төндәрҙә йөн иләп, фронт өсөн ойоҡ-бейәләйҙәр бәйләһен, аҙыҡ-түлек киптерһен. Шунан ни саҡлыһы ҡырылды ла, ҡалғандары ни мөғжизә менән иҫән ҡалды икән? Бөтә ил Еңеүҙең 65 йыллығын билдәләгәндә 1947 йылдың фажиғәһен иҫләүсе булдымы? Ауылды иҫләп, баш эйеп рәхмәт әйтеүсе булдымы? Ағыулыҡһыҙ танк, самолет - бары металл өйөмө генә. Икмәкһеҙ һалдат та еңеү килтерә алмаҫ ине.

Бары һуғыш йылдары өсөн генә лә ауыл компенсация һораһа, түләп бөткөһөҙ бурысың бар, Рәсәй, елкәңдә. Ауыл һеңеренә балта сабыр алдынан, иҫеңә төшөрһәңсе: бары китеп бөтөп, һуңғы ҡарт-ҡоро ҡалғанда ла, ул кеше, ул ауыл алдында бурысың барлығын.

Өләсәйем менән урман ҡырлап киләбеҙ. Уҫағуйҙы үтһәк, зыярат һыртына сығабыҙ. Әле уң яғыбыҙҙа ҙурҙан тапанды ялан ята. Мал йөрөп, үләнен ҡыртышына ҡәҙәр ашап бөтә яҙған. Өләсәйем яландың бер төшөн күрһәтеп, "Ошо ер беҙҙең бесәнлек ине", - ти. Сиктәрен күрһәтә-күрһәтә сабынлыҡ хужаларын барлай. "Ул ҡыртыштың нимәһен саптығыҙ һуң?" - тип һорайым, ишеткәндәремә һис тә ышанғым килмәй. "Яҙҙан көҙгәсә йәйләүҙә йөрөгәс, үлән аҡтарылып үҫә ине", - ти өләсәй, ғәҙәттәгесә урынлы-урынһыҙ хәбәремә иҫе китмәй генә. Шунан йәйләүҙәрҙе һанай башлай: Уртайорт, Ярыу, Ҡарағасйорт, Имәнйорт, Мәсем. Шул уҡ юл менән әкертенләп көҙгә ауылға ҡайтҡандар. Һутлы үләндән һутлыһына күсеп, һөтө-майы, ҡорото, эремсеге менән ҡыуандырып, ҡураға көр мал ҡайтҡан. Малдан тәбиғәткә зыян булмаған. Ә бесәнде кәртә артында ғына эшләгәс, ҡышын ташып алыуы мәшәҡәт тыуҙырмаған.

25 меңселәр килгәнсе. Ҡуйынында ташынан башҡа бер ние булмаған гегемон пролетариат килеп ҡыҫылғансы. Аңы үҫешмәгән крәҫтиәнде аҡылына ултыртҡансы.

Күптән инде бер ни ҙә ишеткәнем юҡ 25 меңселәр тураһында. Тарих дәреслектәрендә лә телгә алынғандары тойолмай. Әйтерһең, булмағандар ҙа. Нәҫел-нәсәбе булһа ла иҫләй, иҫкә аламы икән? Күптәр дворян ата-бабаларын юллағанда, улар ниңә ләммим? Ниңә ғорурланмайҙар, маҡтанмайҙар зат-ырыуҙары менән? Шулай беҙҙә тарих: нәҡ биләүҙәге бала шикелле ҡырҡҡа төрләнә. Бер ҡараһаң - һәйкәл булып ҡалҡа, бер ҡараһаң - баҫа. Бер көн аҡ әләм елберләй, икенсе көн ҡыҙылы. Һәр береһе тарихты үҙенсә түкмәстерә. Әммә ысын тарих берәү генә. Ул халыҡ хәтерендә. Өләсәй-олатайҙарыбыҙ хәтерендә. Ишетәһегеҙме? Шул хәтер набат булып ороп һуға. "Беҙ иҫән саҡта яҙып алығыҙ!" - ти. Тере күҙҙә!

**Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА.**
**Бөрйән районы,**
**Байназар ауылы.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡалай уйландырҙы Көнһылыу апай был яҙмалары менән. Ә бит бөгөн йәшәгән өлкән быуындың да, йәшерәктәренең дә хәтер төпкөлөндә атай-әсәйҙәр, олатай-өләсәйҙәр һөйләп ҡалдырған ваҡиғалар, һабаҡтар, тарих бар. Шуларҙы ҡағыҙға төшөрөүҙе генә һуҙабыҙ, иртәгәгә ҡалдыра киләбеҙ. Улар шулай тора-бара хәтерҙән юйыла, өлкән быуын менән бергә баҡыйлыҡҡа күсә. Көнһылыу апайҙың хәтер төйөндәрен күҙҙән үткәргәс, моғайын да, кемдер күңелендәгеһен аҡ ҡағыҙға төшөрөргә дәртләнер. Ул яҙмаларҙы редакцияла көтөп ҡалабыҙ. Хәтеркитапты бергә яҙайыҡ әле.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# КЕМ БӘХЕТЛЕ,

## ата ҡуянмы, әллә тауыҡ әсәйме?

**Йәй көндәренең береһендә Тузик исемле эт ҡош-ҡорт тауышынан гөр килгән ихатаға ҡарап тәрән уйға батты.**

Һәр кеме үҙенсә йән аҫрап, көн үткәргән була бында. Бер ҡарауға, береһенең дә артыҡ хәстәре лә юҡ һымаҡ: ҡуңыр урындары, ейер аҙыҡтары бар. Ана, ояларында ҡуяндар һикерешеп уйнай, кишер кимерә. Ҡара тауыҡ, себештәре менән маһайып, ҡанаттарын йәйә биреп, түш киреп, ҡурҡылдығы сығып йөрөй. Әйтерһең дә, уның себештәрендә кемдеңдер эше бар. Ә ҡаҙ бәпкәләре һуң? Бер оянан сыҡҡандар, тиһеңме: береһенән береһен айырып булмай. Юҡ ҡына нимәгә лә ҡыуанышҡан булып, муйындарын һоношоп, ҡайғыһын да, шатлығын да бергә бүлешәләр. Әйтергә лә түгел, берҙәм зат. Шулай ҙа төпкәрәк төшә биреп уйлана китһәң, кемеһе бәхетле һуң әле быларҙың? Анау ике "ҡатыны" була тороп та, бер балаһы ла булмаған ҡуянмы? Әллә "ирһеҙ" ун себеш эйәртеп йөрөгән ҡара тауыҡмы? Әллә атай-әсәйҙең кем икәнлеген дә белмәй сипылдашып йөрөгән ҡаҙ бәпкәләреме?.. Ахыр сиктә, ҡойроҡ болғап, хужаның һәр һүҙен йөпләгән булып, тамаҡ хаҡына кәрәккән-кәрәкмәгәнгә лә өргән булып көн үткәргән Тузиктың йәшәйеш бәхете ниҙән ғибәрәт һуң?..

...Кешеләр араһында ла ҡуян атайҙар, тауыҡ әсәйҙәр, ҡаҙ бәпкәләре ише атай-әсәйһеҙ балалар бар. Тузиктар ҙа юҡ түгел. Аллаһ кешеләрҙе ишле итеп яралтҡан. Һәр кем үҙ ишен табып ғаилә ҡорорға, күп итеп балалар үҫтерергә, уларҙы иманлы итеп тәрбиәләргә бурыслы. Балалар атай-әсәйле булып үҫергә тейеш. Бына шул инде тулы бәхет. Бәлки, Тузик атлы эт тә ошондай бәхет тураһында уйланғандыр...Тик уның ни уйлағаны беҙгә ҡараңғы.

**Динара ҠОТЛОБАЕВА.**

МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ

**Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында "Урал батыр" эпосының яҙылып алыныуына 100 йыл тулыуға арналған уҡыуҙар үтте. Институт етәкселеге белдереүенсә, был уҡыуҙар яҙ көнө уҙғарыласаҡ Халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияға әҙерлек кенә икән. Эйе, был сараның бар донъяға танылыу яулаған тиңдәшһеҙ ҡомартҡыбыҙ яҙылып алынған төбәктә шундай кимәлдә үтергә тейешлеге бәхәсһеҙ. Мәсьәләнең икенсе яғы: мәшһүр "Урал батыр" эпосыбыҙҙы бар донъяға танытыу, уны киләсәк тарихының айырылғыһыҙ өлөшө итеү өсөн бик күп ғәмәлдәр атҡарырға әле беҙгә.**

**Уҡыуҙарҙа ғалимә Фәҙилә Бүләкова, крайҙы өйрәнеүсе Азамат Тажетдинов, яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева, фольклор белгесе Асия Солтанова, Сибай сауҙа-иктисад колледжы уҡытыусыһы Зәһүрә Байтурина, медицина колледжы уҡытыусыһы Фәниә Сарбулатова, педколледж уҡытыусыһы Ғилмиә Ильясова һәм башҡалар сығыш яһаны. Һуңынан институттың "Арҡайым" фольклор төркөмө, Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге Сибай башҡорт лицейы уҡыусылары сығыштары ҙур алҡыш менән ҡабул ителде. Әйтергә кәрәк, Уҡыуҙарҙың ғилми йөҙө, фәнни кимәле бик юғары булды. Һеҙҙең иғтибарға уларҙың икеһенән өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.**

# КҮЛДЕҢ ҺЫУЫН ЭСМӘГЕҘ...

## Шулай тигән Урал батырыбыҙ



### ЭПОСТА ТӨҪТӘР САҒЫЛЫШЫ

Кеше донъяға тыуғандан алып бихисап төҫтәр сорналышында йәшәй. Әҙәм балаһының психикаһы шундай: ул төҫтәрҙең мәғәнәһен һәр ваҡыт туранан-тура аңларға һәләтһеҙ, шуға күрә уның теге йәки был төҫкә интылышы аҫҡы аңында йәшәй."Урал батыр" эпосында был интылыш донъяны төрлө төҫтәрҙә һүрәтләүгә ҡоролған:

*Донъя - ул бер бағ икән,*
*Йән эйәһе шул бағта*
*Донъя быуынын һанаған*
*Ҡайһы быуын аҡлаған,*
*Ҡайһы уны тапмаған*
*Төрлө төҫкә биҙәгән.*
*Шаҙраланып өҫтәре,*
*Күҙ сағылыр төҫтәре.*

Беҙҙең ата-олатайҙар төҫтәрҙе, биҙәктәрҙе бик күпкә нескәрәк тойған. Хәҙерге заманда төҫтәрҙе ҡабул итеү тойғобоҙ тупаҫлана, төҫтәр үҙенең фәлсәфәһен, күп мәғәнәлелеген юғалта бара. "Төҫ бөтә урында ла, һәр ваҡытта ла сифат күрһәткесе булып тора", тип иҫәпләй Н.В. Серов. Төҫтөң мәғәнәһен аңламай тороп, кешенең күңелен, интеллектын күҙ алдына килтереп, күрһәтеп һәм үлсәп булмай. Карл Густав Юнг иҫәпләүенсә, төҫ кешегә әсәһе һәм атаһы гендары, архетиптар менән һалына. Эпоста Урал батырҙың тере йәнде ҡыйыуҙы тыйыуға саҡырыуына йәнлектәр өндәшмәү менән яуап бирә, әммә төп фекер төҫкә һалына. Мәҫәлән:

*Ҡоралайы, боланы,*
*Ҡыҙыл сикә ҡуяны*
*Аяғына һаһайып,*
*Бер ауыҙ һүҙ әйтмәгән.*

Бында "ҡыҙыл сикә ҡуян" һүҙбәйләнеше барыһын да асып бирә. Эпоста хайуандарҙы һәм йәнлектәрҙе һүрәтләгәндә 15 тапҡыр ҡыҙыл һәм һоро төҫ ҡулланыла (кешеләрҙе һүрәтләгәндә - 3 тапҡыр). Күк төҫ ике тапҡыр тәбиғәтте һүрәтләгәндә ҡулланыла.

Ғалимдар иҫбатлауынса, төҫтәрҙең кешегә эмоциональ тәьҫире түбәндәгесә:

1. **Ҡара төҫ** - ҡайғы, яңғыҙлыҡ, ҡурҡыу төҫө.

2. **Һоро төҫ** -арыуҙы, мәшәҡәтлекте, сараһыҙлыҡты белдереүсе төҫ.

3. **Аҡһыл һоро төҫ** - тыныслыҡты, билдәһеҙлекте белдереүсе төҫ.

4. **Асыҡ йәшел төҫ** - наҙлылыҡ, еңеллек төҫө.

5. **Ҡара йәшел төҫ** - хафа, күңел, рух төшөнкөлөгө төҫө.

6. **Ҡыҙыл төҫ** - тынысһыҙлыҡ, борсолоу төҫө.

7. **Сағыу йәшел төҫ** - баҫалҡылыҡ, өмөт төҫө.

8. **Зәңгәр төҫ** - күңел күтәренкелеген, күккә олғашыуҙы аңлатыусы төҫ.

9. **Күк төҫ** - тынык, һиллек төҫө.

Инглиз этнологы В. Тернер иҫәпләүенсә, йыш ҡына үлемде, иҫ юғалтыуҙы, төштө һәм ҡараңғылыҡты белдереүсе ҡара төҫ кешенең аңы томаланыуына, иҫен юғалтыуына бәйле:

*Ҡара көйгән ялҡынды,*
*Күкрәге ут тулҡынды*
*Тотоп алған, ти Урал.*

Эпоста иң күбе аҡ төҫ ҡулланыла: хайуандарҙы һүрәтләгәндә - 47, тәбиғәтте - 3, кешеләрҙе - 8 тапҡыр. Аҡ төҫ - абсолют сафлыҡ төҫө, рухилыҡ, илаһилыҡ символы. Боронғо йәмғиәттә аҡ төҫ ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ берҙәмлеген аңлатҡан. Эпоста аҡ төҫ шулай уҡ халыҡ берҙәмлеген, традицияларға тоғролоҡто, изге хәтерҙе сағылдыра:

*Һыуһағыҙ уйында*
*Ана, аҡ һыу эсегеҙ...*

Эпоста йәшел төҫ - тәбиғәт, ғүмер һәм үлемһеҙлекте аңлата. Йәшел төҫ - 

яңырыу, яңынан тыуыу, йәшлек һәм өмөт төҫө:

*Тау-урмандар йәшәрһен,*
*Мәңге үлмәҫ төҫ алһын.*

Сығышымды Б.П. Юсовтың һүҙҙәре менән тамамлағым килә: "Халыҡ яҙмышы өсөн иң мөһиме уның туған теле һәм географик хәле - уны уратып алған мөхите, сөнки барлыҡ һүҙҙәрҙең өстөн ике өлөшө күҙ күргән төшөнсәләрҙән тора. Телен һәм тыуған ерен юғалтҡан этнос көндән-көн мәғәнәһен юғалта барған традицион байрам көндәрендә кейенгән кешеләр төркөмөнә әүерелә".

**Ғилмиә ИЛЬЯСОВА,**

**Сибай педколледжы уҡытыусыһы.**

### ЭПОСТА МЕДИЦИНА ҠАҒИҘӘЛӘРЕ

Сибай медицина колледжы студенттары өсөн төҙөлгән методик әсбапта "Урал батыр" эпосынан өҙөк алынған һәм эш төрҙәре күрһәтелгән: эпос буйынса фекер алышырға, өҙөк ятларға. Йыл һайын һигеҙ төркөм ошо эштәрҙе бер пар дәрес буйы башҡара. Әлбиттә, тәү сиратта беҙ эпостан медицинаға ҡағылышлы юлдарҙы эҙләйбеҙ. Әҫәрҙең түбәндәге юлдары шундуҡ иғтибарҙы биләй:

*Ауырыу-һыҙлау күрмәгән,*
*Үлем барын белмәгән,*
*Барлыҡ нәмәгә үлем -*
*Үҙебеҙ тип һанаған...*

Урынлы һорау тыуа: Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ, уларҙың улдары Урал менән Шүлгән ауырыу-һыҙланыу белмәйенсә, нисек итеп йәшәй алған? Хәҙерге медицина күҙлегенән ҡарағанда, яуаптар ошолайыраҡ:

- улар дөрөҫ туҡланған;
- халыҡ медицинаһы юғары кимәлдә булған;
- гигиена-санитария ҡағиҙәләре үтәлгән.

Дөрөҫ туҡланыу тураһында түбәндәге юлдар һөйләй:

*Йыртҡыс йәнлек тоттониһә,*
*Йәнлек иркәк булдыниһә,*
*Ирле-бисәле икәүһе*
*Башын сәйнәп ашаған...*
*Йәнлек орғасы булһа,*
*Ирле-бисә икәүһе*
*Йөрәгене һайлаған.*
*Үлем емшәр йән тотһа,*
*Ҡара һөлөк ҡаҙаған,*
*Һөләгәнән һурҙырып,*
*Ҡанды һынһын яһаған.*

Тимәк, ололар менән балаларҙың ризыҡтары айырыла. Күрәһең, билдәле йәшкә етмәйенсә, бала организмы ололар ашаған ризыҡты эшкәртә алмаған. Ә һыуһынға эсә торған ҡанға килгәндә, кем әле болан йәки мышының ҡанын ҡара һөлөктән һурҙырып, шуны ҡабырсаҡта һаҡлап, составын тикшереп ҡараған? Бәлки, ул кешене йәшәртә, көс бирә, ҡартайтмай торған элексирҙыр? Ҡанды эсеүҙән балаларҙы юҡҡа ғына тыймағандар бит.

Халыҡ медицинаһына килгәндә, ул бик юғары кимәлдә булған. Мәҫәлән, Көньяҡ Америкала йәшәүсе мамас исемле аборигендар бала табыр ҡатынды мәмерйәгә йәшәргә оҙаталар икән. Уның балаһы, әсәһенән һөйәләп кенә, тәбиғәт ҡосағында кеше күҙенә күренмәйенсә, 8-10 йәшкә тиклем үҫә. Ырыуға ҡайтҡас, бала: "Был үлән - бауырҙан, был сәскә - йөрәктән",- тип, ырыуҙаштарын дауалай башлай.

Эпоста Йәнбирҙе менән Йәнбикә кеше аяҡ баҫмаған ерҙә йәшәгән. Улар йәнлек, ҡош-ҡорт, үҫемлектәрҙең телен белгән, улар менән һөйләшә алған.

Гигиена-санитария ҡағиҙәләренә килгәндә, Урал батырҙың васыятына иғтибар итәйек:

*Уландарым, һеҙгә әйтәм:*
*Уйым-уйым күлдәрҙең*
*Барында дейеү буласаҡ,*
*Уҫаллығын ҡыласаҡ,*
*Эсегеҙгә керәсәк...*
*Күлдең һыуын эсмәгеҙ...*

Тимәк, күл һыуын эсергә ярамай, төрлө ауырыуҙар йоҡтороуың мөмкин. Бәлки, Урал батырҙың эс-бауырын ҡырҡҡан йоғошло ауырыуҙар ҙа булғандыр. Эсер һыу етмәгәс, Иҙел батыр, Шүлгәнгә яу асып, күлде яуыҙҙарҙан ҡотҡарырға була. Шул саҡ Һомай былай ти:

*Һеҙгә аҙаҡ атағыҙ:*
*"Күлдең һыуын эсмәгеҙ,*
*Эсеп әрәм булмағыҙ",-*
*Тип әйткәйне түгелме?*
*Шүлгәнгә яу асһаң да,*
*Уны тар-мар итһәң дә,*
*Күленән ил мандымаҫ,*
*Әсә һөтөндәй булып,*
*Илде мәңге һуғармаҫ...*

Тимәк, эсер һыу ағып ятҡан һыу булырға тейеш. Аҙаҡ Иҙел буйында кеше күбәйеп, һыуға ҡытлыҡ тыуғас, Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмар батырҙар йылғаларға юл асҡан. Бөгөн ул йылғаларҙа ҙур-ҙур быуалар төҙөлә. Күп ҡалаларҙың халҡы быуа һыуын эсә. Быуа һыуы - шул уҡ күл һыуы. Тимәк, ул һыуҙар ауырыу сығанағы. Быйыл ҡоролоҡ арҡаһында байтаҡ урында һыу етешмәне, ҡоҙоҡтарҙан һыу китте. Эсер һыу ҡытлығы тыуасағын, кешеләрҙең быуа һыуҙарын эсерен боронғо башҡорттар ҡайҙан белде икән?

**Фәниә САРБУЛАТОВА.**

**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ни өсөн атай-олатайҙарыбыҙҙың борон-борондан күлдәр янына ауылдар нигеҙләмәгәнен, өйҙәр һалмағанын аңларға була. Тимәк, улар Урал батырҙың васыятына тоғро ҡалған, тигән һүҙ. Ошо күҙлектән ҡарағанда, күлдәр янында урынлашҡан ял йорттарының, санаторийҙарҙың кешенең һаулығына ниндәй йоғонто яһағанын күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ инде. Һуңғы ваҡытта беҙҙең ерҙәрҙә урынлашҡан күлдәр янына ситяттар килеп, төрлө юлдар менән ер алыуға өлгәшеп, йорт һала. Ай-һай, унда ҡот ҡунамы икән кешегә? "Күлдең һыуын эсмәгеҙ... күленән ил мандымаҫ..." тигән бит Урал батырыбыҙ.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әҙерләне.**

✓ *2008 йылда Вена һәм Берлин фонограммархивтарында һаҡланған башҡорт йырҙарының яҙмаларын юллап сыҡҡан сәфәребеҙҙә Ғәлимйән Тағандың йыр яҙмаларын тыңлау һәм уларҙың күсермәләрен алып ҡайтыу бәхете эләкте.*



**1939 йылда Вена Фәндәр академияһы тарафынан немец телендә "Рәсәй әсирҙәренең йырҙары" исемле ике томлыҡ хеҙмәттең икенсе бүлеге баҫылып сыға. Башҡорт йырҙарына бағышланған был китапты Әхмәтзәки Вәлидиҙең ҡыҙы - тарих фәндәре докторы, профессор Иҫәнбикә Туған атаһының архивында табып ала һәм Башҡортостанға тапшыра ("Рәсәй әсирҙәренең йырҙары". Зилиә Рәйемғужина, Әхәт Салихов. "Ватандаш", 1998 йыл, №4).**

## Немец ғалимдары менән берлектәге эш

Был йырҙарҙы Беренсе Бөтә донъя һуғышы йылдарында әсиргә төшкән башҡорт һалдаттарынан немец ғалимдары яҙып алған булған. Башҡортса йыр текстарының транскрипцияһы һәм тәржемәһе доцент доктор Герберт Янски һәм доктор Ғәлимйән Таған тарафынан эшләнгән. Был турала Герберт Янски бына нисек яҙа:

"Был томдың икенсе бүлегендә, тәүҙә уйлағанса, Ҡаҙан татарҙары, мишәр һәм көнбайыш себерҙәрҙең йырҙары түгел, ә башҡорт йырҙары баҫылды. Алдан уйланған пландың үҙгәртелеүенә ҡыуаныслы сәбәп шул. 1930 йылдан алып 1931 йылға тиклем Венала минең хөрмәтле башҡорт дуҫым доктор Ғәлимйән Таған әфәнде туҡтаны. Алда һүҙ барасаҡ башҡорт йырҙарын эшкәртеү ауырлығы бар ине. Эшемдең башынан уҡ был ауырлыҡты тойоп, маҡсатымды башҡарып сыға алырмынмы, тигән уйға ҡалдым. Уның хеҙмәттәшлеге тәүге планды алмаштырырға мәжбүр итте. Башҡа йырҙар быларҙан һуң да сыға алыр. Доктор Ғәлимйән Тағандың көсө һәм ҡатнашлығы ошо эшкә уңыш килтерҙе. Был баҫмабыҙҙы ул үҙ иленең йырҙарын үҙе йырлап күрһәтеп байытты һәм беҙ профессор Лах тарафынан йыйылған йырҙарҙы бергәләп баҫтыра алдыҡ. Томдың баһаһын күтәргән тулыландырыуҙарға рөхсәт биреүҙәре өсөн үҙем һәм Ғәлимйән Таған исеменән Бөйөк Вена Фәндәр академияһына, профессор Лах әфәндегә рәхмәт әйтәбеҙ.

Был бәхет йондоҙо аҫтында башланғайны. Ул аҙағына тиклем беҙгә ярҙам итергә тейеш ине. Һәм эшебеҙ бөтөүгә яҡынлашҡас, һис кем түгел, ә халҡының бөйөк улы, дуҫым, профессор, доктор Әхмәтзәки Вәлиди килеп сыҡты. Венала булған сағында ул минең менән осрашты, эшем хаҡында һөйләште, ҡиммәтле кәңәш һәм аңлатмалар бирҙе. Аңлатмалар яҙғанымда уларға ҙур иғтибар бирҙем. Халҡы менән тығыҙ бәйле, уның ғөрөф-ғәҙәттәрен, шулай уҡ хәҙерге фән методикаларын белгән ике башҡорт ғалимы ҡатнашлығында ошо китаптың баҫылыу шарттарын идеаль тип әйтеүҙән тағы ла ҙурыраҡ баһалама юҡтыр. Ваҡыттарын һәм тырышлыҡтарын һалып, халҡының йырҙарынан һәйкәл ҡуйыу теләгенән башҡа теләктәре булмаған дуҫтарыма тағы ла бер мәртәбә рәхмәт әйтәмен. Том өҫтөндә тырышып эшләүҙәре, дуҫтарса бер күңелдән башҡарыуыбыҙ, уртаҡ хәтирәләребеҙ, фән өлкәһендәге дуҫлығыбыҙ мине бик ныҡ ҡәнәғәтләндерҙе".

Томға профессор Лах әсирҙәр лагерында фонографҡа Шәһәрғәзи Күсәмишевтан (крәҫтиән, 35 йәш, Ырымбур губернаһы, Орск өйәҙе, Бөрйән волосы, Булат ауылында тыуған, хәҙерге Әбйәлил районы) яҙып алған өс йыр, Исмәғил Ғәлиәхмәтовтан (крәҫтиән, 33 йәш, Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙе, Яман Тирлән волосы, Ямангилде ауылында тыуған, хәҙерге Әбйәлил районы Амангилде ауылы) яҙып алған ете йыр, Солтанғәзи Мәүлетовтан (сығышы тураһында мәғлүмәттәр юҡ. Профессор Лах был, шикһеҙ, оҫта йыраусыны бер нисә тапҡыр фонографҡа яҙа. Үҙе тураһында мәғлүмәттәр яҙып өлгөрмәгән, һуңғы килгәнендә, Солтанғәзе Мәүлетов икенсе лагерға күсерелгән була - **Ю.Ғ.**) яҙып алған егерме ике йыр, шулай уҡ Герберт Янски менән бергә эш мәлендә Ғәлимйән Тағандан яҙып алынған ун өс йыр ингән. Был йырҙарҙың ғәрәп һәм латин яҙмаларында башҡортса тексы һәм шулай уҡ немец теленә тәржемәһе, нота яҙмалары (Ғәлимйән Тағандан яҙып алынған йырҙарҙың нота яҙмалары юҡ, күрәһең, әҙерләп өлгөрә алмағандар - **Ю.Ғ.**) баҫылған.

## Яҙмаларҙы юллап сәфәр сыҡтыҡ

2008 йылда Вена һәм Берлин фонограммархивтарында һаҡланған башҡорт йырҙарының яҙмаларын юллап сыҡҡан сәфәребеҙҙә Вена фонограммархивында Ғәлимйән Тағандың йыр яҙмаларын ("Әрме", "Матур ҡыҙ", "Искәндәр", "Төхфәт кантон", "Елгилде", "Зәки Вәлиди" йырҙарының яҙмалары һаҡланған - **Ю.Ғ.**) тыңлау һәм уларҙың күсермәләрен алып ҡайтыу бәхете эләкте.

Зәки Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр"ендә дуҫы, көрәштәше Ғәлимйән Тағандың йыраусылыҡ маһирлығына ифрат юғары баһа бирә: "Ул кистә Ғәлимйән Таған менән дуҫы Горфи Иштван мине һәм Хөсәйен Намыҡты бик яҡшы бер ресторанға саҡырып, мадьяр аштары һәм токай шараптары менән һыйланы. Был ҡеүәтле шарап булып сыҡты, төн уртаһында сәғәт берҙәр тирәһендә ресторандан сыҡҡанда өсөбөҙ ҙә (Абдулҡадир Инан да бергә була - **Ю.Ғ.**) башҡортса йырлай инек. Доктор Таған ғәжәп моңло итеп бер-бер артлы бик күп башҡорт йырҙарын йырланы. Мадьяр ҡатындары тәҙрәләрен асып тыңлай..."

Үткән быуаттың аҙағында Ҡурған өлкәһенең Сафакүл, Әлмән райондарында үҙҙәренең төбәгенең һирәк йырҙарын йырлаған, был төбәккә генә хас булған башҡарыу үҙенсәлектәренә эйә булған оҙон көй оҫталары ҡатнашыуында "Хазина" тапшырыуҙары әҙерләргә насип булды, һәм Вена фонограммархивында һаҡланған Ғәлимйән Тағандың яҙмаларын тыңлағандан һуң, Зәки Вәлидиҙең баһаһында һис кенә лә арттырыу юҡ, тип раҫлай алам. Ысынлап та, Ғәлимйән Таған - үҙ яғының башҡарыу үҙенсәлектәрен, нескәлектәрен, һирәк йырҙарын тәрән белгән мәшһүр йыраусы булған, юғары тауыш менән йырлаған. Һәм тағы: Ғәлимйән Таған йырҙың мәғәнәһен тәрән тойоп, иҫ киткес рухлы йырлай, һөҙөмтәлә уның башҡарыуында йырҙың һүҙ мәғәнәһе һәм көйө бер бөтөнгә әйләнә.

## Аҫыл йырҙарыбыҙ өлгөләре

Түбәндә Ғәлимйән Тағандан яҙып алынған йырҙарҙың текстары килтерелә:

### *Ҡасим түрә*

Башҡынайым минең бик ауырый, уай, кем,
Һиңкелдәтмәй апарың көймәмде.
Эскенәйем минең янып бара, уай, кем,
Ыҫҡындырың көмөш тә төймәмде.

Атай-инәй , дуҫ- иш теләй микән
Төшмәһен тип ҡаты яуҙарға.

Кәлмәрзин сәкмән, әй, баса тун
Элеп ҡуйҙым түргә бүлмәгә.
Иҫән дә йөрөп һауҙар ҡайтһам,
Риза булам иртән үлмәгә.

### *Матур ҡыҙ*

Бахтыуай ҙа шаршау сите бурҙат
Аның теккән ебе күк була.
Матур егет менән матур ҡыҙҙың
Һөйләшкәндә һүҙе күп була.

Күктә генә болот, ай, бүленгән
Күк ефәккәй менән эленгән.
Ҡыҙ бала, һинең зирәклегең
Ун ете лә йәштән беленгән.

### *Искәндәр көйө*

Һаҡмар буйы ташлы икән,
Искәндәр ҡәләм ҡашлы икән.
Исеме яҡшы Искәндәр
Биш ауыл мишәр башы икән.

Бала ла уҫаҡ ҡабығы
Бала ла ҡуян ауыҙы.

# Ғәлимйән Таған

## йәки Башҡорттоң бөйөк



ФОТОҺҮРӘТТӘ: уңдан икенсе - Ғ. Тағандың ейәнсәре Зөбәйҙә Мусина (уҡытыусы), һулдан беренсе - бүләре Вадим Мусин (архитектор), икенсе - бүләсәре Алиә Мусина (табибә), өсөнсө - бүләсәре Гүзәл Нурғәлиева (уҡытыусы), бишенсе - бүләре Даян Әйүпов (уҡытыусы).

Ҡасим түрә менгән һор юрға ла, уай, кем
Бора ташлап килә лә муйынын.
Ҡасим түрә вафат булған тигәс, уай, кем
Кафыр майор уйната уйынын.

### *Әрме көйө*

Бейек тә тауға менгән саҡта
Беләүгә лә тиеп таш алдым.
Бара ла ғына торған ерем йыраҡ тигәс,
Ике күҙкәйемдән йәш алдым.

Беҙ киткән саҡта, әй, юҡ үлән
Ат күҙ төпкәйенә етте инде,
Ҡанатлы ҡоштар етмәҫ ергә
Ғәзиз баштар китте инде.

Ҡарағай ҡапҡа, әй, еҙ ҡулса
Беҙ киткәндә ҡалды һул яҡта.
Алдым да ҡәләм яҙҙым сәләм
Япраҡ кеүек һарғайған саҡта.

Ай һай ҙа тауҙың, ай, бейеге
Арыҫлан менән кейек ауларға
Күлдәй ҙә күлдәй күҙ йәш мин түктем,
Бөрйәндәргә булһын яҙығы.

### *Тәфтиләү көйө*

Һандуғас мәхлүҡ, әй, ояла,
Оялары йәшелгә буяла.
Кемдең дә йәре, кемдең малы
Кемдәрҙән ҡалмай фани ла донъялар.

**(Әхмәтзәки Вәлиди ошо йыр юлдарын Гамбург ҡалаһы зыяратында дуҫының ҡәбер ташына соҡоп яҙа - Ю.Ғ.)**

Ҡара ла урман, ҡараңғы төн
Яҡшы аттар кәрәк тә үтергә.
Замана ауыр, халҡы фетнә,
Дуҫ-иш кәрәк ғүмерҙәр итергә.

Йүгереп тә йүгереп, әй, уйнарға
Оло юлҡайҙарҙың эсендә.
Яна ла йөрәк, көйә лә бигерәк
Йәш күкрәккәйемдең дә эсендә.

### *Төхфәт кантон көйө*

Урай ғына урай ай сабырға
Һәнгел буйы кеүек ер ҡайҙа.
Уйнап та көлөп яуап бирә
Төхфәт кантон кеүек ир ҡайҙа?

Дүрт тәҙерә үтә емдәр һиптем
Үҙгенәйем һөйгән бөркөткә.
Насыретдин мулла даулашмаһын
Алдырырмын аны Өркөткә.

### *Елгилде көйө*

Елгилде лә буйы байсауылға
Ҡыҙ балалар сыға уйынға.
Ҡайтайым да тиеп атҡа менһәм,
Аҫылып илай ҡыҙҙар муйынға.

Елгилде лә күлдең аръяғында
Ялтырапҡай ята арҡаһы.
Яурынынан тапап һөйәр инем
Шауҙырайҙыр алтын алҡаһы.

### *Хәбирә көйө*

Ел сыҡҡандарын шунан беләм
Сауыл башҡайҙарын да ел борһа.
Хәбирә, һине алмай ҙа ҡуймам,
Никах менән тәҡдир ҙә бойорһа.

# – ЙЫРАУСЫ

## улының йыр яҙмалары

Иртә генә тороп тышҡа сыҡһам,
Әйләнә икән ауыл тирмәне.
Һораманың тиеп үпкәләйһең,
Мин һораным, инәйең бирмәне.

### Кәрим улы көйө

Ҡара атҡайым ҡайыш әй нуҡталы,
Аҡ- күк атым көмөш тә нуҡталы.
Һөймәгән дә йәргә көсләп бирҙең,
Иҫеңә төшөр, инәкәй, тукта әле!

Кәрим улы кафыр, дин дошманы,
Кереп ятты иш минең дә ҡуйыныма.
Ҡуйыныма ла кереп ятҡандан һуң
Бысаҡ һалдым үҙем дә муйыныма.

* * *

Беҙ китәбеҙ, инәй, алыҫ юлға,
Беҙ килә тип, инде көтмәгеҙ,
Текмә, инәй, миңә еңле күлдәк,
Мин кейәрем еңһеҙ күлдәгем.

Балаҡайым, һине мин тыуҙырҙым,
Яу килгәндә ҡаршы сыҡһын тип,
Ил өҫтөнә килгән яу дошманды
Йөрәгенә һөңгө тыҡһын тип.

**(Был йырҙың исеме күрһәтелмәгән, әммә мәғәнәһенән боронғо яу йыры - бәлки, ихтилал ваҡытында сыҡҡандыр - икәне күренә. Уны шартлы рәүештә "Яуға оҙатыу" йыры, тип атарға мөмкин. Борондан Ғәлимйән Таған кеүек батырҙар ошондай йырҙарҙы тыңлап үҫеп тәрбиәләнгән дә инде - Ю.Ғ.)**

### Зиләйлүк көйө

Ултырҙым ҡайын төбөнә,
Ҡойола ла һары япраҡ.
Ҡайтайым тиһәм ҡайталмайым, зиләйлүк,
Әллә тарта микән тупраҡ.

Ҡысҡыра кәкүк ҡысҡыра
Таң атҡанда ҡайын башында.
Биш ваҡыт намаҙ уҡыманым, зиләйлүк,
Ни әйтерем Алла ҡашында.

### Урал көйө

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы,
Беҙҙең атайҙарҙың да төйәге,
Иле өсөн гәзиз ҡанын биргән
Шунда ята уларҙың һөйәге.

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы
Әллә низәр һала ла күңелгә?
Моңлана ла күңел әй һырҙана
Башҡорт иле бөтөн түгелгә.

**(Китапта "Урал" йырының аңлатмаһында, Абдулҡадир Инан һүҙҙәре, тип күрһәтелгән. Был йырҙа Башҡортостан дәүләтселеге өсөн йәнен аямай ҡулына ҡорал алып милли хәрәкәткә күтәрелгән батырҙарҙың рухы сағыла - Ю.Ғ.)**

### Зәки Вәлиди көйө

Батыр егет килә ат өстөндә,
Аты уйнай ауыҙын тартҡанда,
Булат һауыт кейгән, һөңгө тотҡан,
Таштар яра уҡтар атҡанда.

Аҡ осҡондар оса ат ауыҙынан,
Таштар һына аяғы аҫтында,
Алға бара батыр, алға саба,
Саң-төтөнө ҡала артында.

Нигә ашыға батыр, нигә ашҡына,
Ни эшләгән батыр, ни күргән?
Намыҫы бар егет ҡалай ятһын,
Ил ситенә бөгөн яу килгән.

"Әрме" йыры




"Елгилде көйө"




"Матур ҡыҙ" йыры




"Зәки Вәлиди көйө"




(Нота яҙмалары - авторҙыҡы).

Был ун өс йырҙың бишеһе, атап әйткәндә, "Каһым түрә", "Искәндәр көйө", "Тәфтиләү көйө", "Төхфәт кантон", "Урал көйө" беҙгә билдәле йырҙар.

"Башҡорт халыҡ ижады". Йырҙар. 1-се китап (төҙөүсеһе - Салауат Галин) томына ингән үткән быуаттың 60-сы йылдарында Ҡурған өлкәһе башҡорттарынан яҙып алынған "Бахтыуай шаршау" йырының һүҙҙәре "Матур ҡыҙ", "Юлгилде" йырының һүҙҙәре "Елгилде көйө"нөң һүҙҙәренә яҡын. Күренеүенсә, йырҙарҙың исеме үҙгәргән. Ғәлимйән Тағандың уларҙы боронғоса, дөрөҫ атағаны шикһеҙ. Мәҫәлән, Елгилде - күл исеме, Юлгилде - кеше исеме, йырҙа Елгилде күле буйында уйнаған йәштәрҙең күңелендәге саф тойғолар тураһында йырлана. Мәғәнәһен, тарихын белмәй йырлаған осраҡтарҙа бындай үҙгәрештәр булыу ихтималлығы бар шул.

Ә бына "Хәбирә көйө", "Кәрим улы көйө", "Зиләйлүк" (был исемле билдәле йыр менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ), "Зәки Вәлиди көйө", "Яуға оҙатыу", "Әрме" (вариант - **Ю.Ғ.**) йырҙары беҙгә, һәр хәлдә миңә, бөтөнләй билдәһеҙ ине.

Вена фонограммархивынан алып ҡайтҡан күсермәләрҙән Ғәлимйән Таған башҡарыуында ике йыр яҙмаһы - "Искәндәр көйө" һәм "Төхфәт кантон" халыҡҡа сағыштырмаса билдәле йырҙар. Бөгөн дә уларҙы башҡарыусы апайҙар, ағайҙар осрай әле. Беҙ әле Ғәлимйән Таған арҡаһында ғына юғалмай ҡалған ҡомартҡыларҙы тәҡдим итмәксебеҙ.

"Әрме" йырының фонограммаһының паспортында, башҡорт ғәскәрҙәренең Наполеонға ҡаршы яуҙа йырлаған маршы, тигән аңлатма бирелгән. 1812 йылғы Ватан һуғышына бәйле сыҡҡан "2-се Әрме" йыры бар, ул яуға китеүселәр һәм уларҙы оҙатыусыларҙың ҡапма-ҡаршы йырлашыуы рәүешендә ижад ителгән. "Әрме" йырының был варианты иһә ошоғаса билдәһеҙ ине, ул Ғәлимйән Таған башҡарыуында ғына беҙгә килеп еткән ҡомартҡы. Ғәлимйән Тағандың репертуарында бындай һирәк тарихи йырҙың булыуы уның үҙенең йыраусылыҡ кимәленең һоҡланғыс юғарылығын күрһәтә.

"Елгилде көйө"нөң һүҙҙәрендә лә, көйөндә лә йәш егеттең иҫ киткес саф тойғолары сағыла. Был йырҙа ла Ғәлимйән Тағандың үҙенең шәхесе күренә һымаҡ.

### Таған мөхәббәтенә тоғро ҡалған

Ғәлимйән Таған, мәғлүм булыуынса, 1892 йылда Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙе Ялан-Ҡатай волосы Тәнрекүл (хәҙерге Ҡурған өлкәһе Әлмән районы) ауылында тыуа. Мәҙрәсә, рус мәктәбен, Өфөлә уҡытыусылар институтын тамамлағас, ауылында уҡыта. 1-се Бөтә донъя һуғышы башланғас, хәрби хеҙмәткә саҡырыла һәм офицер дәрәжәһендә һуғыштарҙа ҡатнаша. Һәләтле һәм ҡыйыу егетте Тифлис хәрби училищеһына уҡырға ебәрәләр. 1917 йылда Башҡортостан дәүләтселеге өсөн милли хәрәкәткә ҡушыла, Башҡорт ғәскәрендә 3-сө полк командиры була. Ҡыҙылдар уның полкын "хоҙай яҙаһы" ("божья кара", Ғәлимйән Тағандың бүләсәре Алиә Мусинаның "Ғәлимйән Таған шәжәрәһе" хеҙмәтенән мәғлүмәттәр - **Ю.Ғ.**) тип йөрөткәндәр. 1919 йылдың февралендә Башҡорт ғәскәре ҡыҙылдар яғына сыға, ә Ғәлимйән Таған үҙенең полкы менән аҡтар яғында ҡала. Артабан эмиграция юлдары менән Харбин, Япония аша 1922 йылда Венгрияға килеп төпләнеп, этнография, иҡтисад фәндәрендә тәрән эҙ ҡалдыра. Йәш сағы утлы гәрәсәт эсендә үтә, шәхси тормош менән йәшәргә ваҡыты ла, мөмкинлеге лә булмаған һымаҡ та. Юҡ, Ғәлимйән Таған был йәһәттән дә тәүәккәл булған икән шул. Милли хәрәкәткә яҡташтарынан ғәскәр туплап йөрөгәндә, Ялан-Ҡатай улысы Баҡай ауылы (хәҙерге Ҡурған өлкәһе Сафаҡул районы) урамынан һыбай үткәндә тәҙрә аша бер ҡыҙҙы күреп ҡала һәм ғашиҡ була. Мәғмүрә һылыу менән сәстәре сәскә бәйләнә. 1919 йылда ҡатыны Мәғмүрәне, өс кенә көнлөк ҡыҙы Хәҙисәне ҡайтып күреп китеүе һуңғы күрешеүҙәре була. Сит илдә йәшәгәндә ҡатыны менән берберенә йырҙар яҙып хат алышалар. 1937 йылда Мәғмүрәне ҡулға алалар, 1938 йылда аталар. 17 йәшлек Хәҙисәгә



(Хәҙисә Тағанова Зәйнәкәй ауылынан Мөхәмәт Ғәфүров исемле егеткә тормошҡа сыға, өс улдары, өс ҡыҙҙары тыуа, артабан 13 ейән-ейәнсәрҙәре донъяға килә. Ғәлимйән Тағандың ҡыҙы Хәҙисә инәй бөгөн гүр әйәһе инде, ә ейәндәре, бүләр-бүләсәрҙәре бөтәһе лә уның рухына тоғро! - **Ю.Ғ.**) ни мөғжизә менәндер теймәгәндәр. Ғәлимйән Таған, әлбиттә, Мәғмүрәһен юғалтҡанын белә, әммә мөхәббәтенә тоғро ҡалып, өйләнмәй. 1948 йылда Гамбург ҡалаһында вафат була. Ғәлимйән Таған илендә саҡта "Матур ҡыҙ" йырын өҙөлөп яратҡан Мәғмүрәһенә арнап йырлағандыр, сит яҡтарҙа ғүмер буйы һөйгәнен юҡһынып йәшәгәнендә ошо йырҙы йырлап, уны күҙ адына килтергәндер...

### Вәлидигә арнап

"Зәки Вәлиди" йыры тексы яғынан да, көйө яғынан да башҡорт батырҙарына арналған боронғо героик йырҙарҙы хәтерләтә. Ул, әгәр исеме күрһәтелмәһә, мәҫәлән, халҡыбыҙҙың милли батыры Салауат Юлаевҡа арнап сығарылған йырҙарҙың бер варианты тип ҡабул ителә алыр ине, тик "батыр егет" урынына "Салауатҡай" тип йырларға ғына кәрәк. Ошо йыр миҫалында ғына ла Башҡортостан дәүләтселеге өсөн көрәште етәкләгән Зәки Вәлидиҙең башҡорт халҡы, арҡадаштары өсөн кем булған икәне асыҡ күренә.

"Зәки Вәлиди көйө"нөң аңлатмаһында "Йырҙа Әхмәтзәки Вәлидиҙең бойондороҡһоҙлоҡ өсөн башҡорт хәрәкәте етәксеһе булараҡ эшмәкәрлеге данлана; һүҙҙәре Абдулҡадир Сөләймәндеке, көйө доктор Ғәлимйән Тағандыҡы", тип күрһәтелгән. Йәғни, Ғәлимйән Таған мәшһүр йыраусы булыуы менән бергә көйсә лә булған.

**Юлай ҒӘЙНЕТДИНОВ.**

*✓ Итәге мәскәүләп тегелгән күлдәктең тәңкәләре яуап булып сыңланы. Бындай нәмәне ул ҡабул итә алмай. Затлы булғаны өсөн түгел, уның Аҡбүрегә бөтөнләй кәрәге юҡ. Кем яугирғә ҡыҙҙар күлдәге бүләк итһен?*






Ҡатыны Аҡбикә: "Баланы кем тип атайыҡ?" - тип һорағас, оҙаҡ уйлап торманы: "Аҡбүре"- тигәйне. "Аҡ" һүҙе бөтөн яҡшылыҡты үҙ эсенә ала, әсәһененең исеменә, Аҡбикәгә лә, яҡын булыр. Ә "бүре"гә килгәндә, Янғол "бүреләр" араһынан бит. Дөрөҫ, сәйерһенгәндәр булды, йәнәһе, аҡбүре тәбиғәттә юҡ та баһа. Уларға атай кеше ошолай тип яуап бирҙе: "Тап шулай. Аҡбүре - фәҡәт кеше исеме. Ә күкбүре һәм һорбүре - урман кейеге. Шуға ла уны исем итеп ҡушмайым".

Хәҙер Аҡбүре-Бүребай үҙ һүҙен тота белгән, уның һәр бойороғон еренә еткереп үтәгән яугир, уң ҡулы булып тора. Ул атаһының ғорурлығы. Ағалары Аҡбала менән Аҡъегеттең ҡонон нисек ҡайтарасаҡ әле! Янғол тәрән, үткер, бер үк ваҡытта һағышлы ҡарашын офоҡҡа төбәне. Йәнә лә яҡты күҙҙәре менән яҡты донъяға бағырға өлгөрмәгән ҡустыһы өсөн дә...

Бер аҙҙан туфалтала Бүребай күренде.

- Атай, болан мөгөҙө апарыу тураһында һөйләшелде.

- Ҡасанға?

- Юл асылыу менән, тине. Йәйын эҙләй.

- Шиге юҡмы алай-былай?

Исеме атап әйтелмәһә лә, һүҙ Хөсәйен тураһында бара. Эйе, был егеттең атаһы Ишҡар бей Пушкаревтың әшнәһе, теге яуыздарҙың ҡәлғәһенә барғылаштыра. Янғолдоң да ҡан дошманына "байрам" күрһәтер сәғәте һуғыр. Бының өсөн Ишҡар улын файҙаланасаҡтар. Бүләк ҡабул итеү Пушкаревтың яратҡан шөғөлө. Ишетеүенсә, болан мөгөҙө ҡатынына кәрәк. Питерға дуҫтарына бүләк итеп алып ҡайтыр өсөн йыя, тиҙәр. Әле ҡатыны ла ҡунаҡҡа килеп төшкән. Кемгә байрам, ә кемгә...

* * *

- Аҡбүре! Беҙ оло туй яһарбыҙ. Һине иң матур бүләктәргә күмермен.

- Мине?.. Ни өсөн?!

- Бер битең ай, икенсеһе ҡояш булғаны өсөн...

- Ай, ҡояш... Хәбәрең ҡыҙыҡ һинең, бей улы.

Хөсәйен йылмайған килеш тора бирҙе. Шунан бер төргәкте һуҙҙы.

- Нимә ул?

Танауға хуш еҫ килеп бәрелде. Төргәк эсендәге яҙҙы, был ҡатын-ҡыҙ күлдәге ине... Аҡбүре күҙен селт-селт йомдо.

- Ә был нимәгә?

Шунан ауыҙы ҙур асылды. Итәге мәскәүләп тегелгән күлдәктең тәңкәләре яуап булып сыңланы. Бындай нәмәне ул ҡабул итә алмай. Затлы булғаны өсөн түгел, уның Аҡбүрегә бөтөнләй кәрәге юҡ. Кем яугирғә ҡыҙҙар күлдәге бүләк итһен?

...Бүребай тау ҡыуыштары аша үтеп, үҙҙәре торған ҡышлаҡҡа барып етте. Уйылғы тип йөрөтөлә был урын. Бында бер нисә бәләкәй генә өй, яҡын килмәйенсә уларҙы күреү ҙә, табыу ҙа мөмкин түгел. Егеттең бүләген һике аҫтына бырҡтырҙы. Бер аҙҙан яңынан килтереп сығарҙы. Йәйеп һалды. Ул йәнә күлдәкте йомарланы, был юлы урындыҡ өҫтөндәге һандыҡ эсенә ташланы. Ары-бире йөрөштөргәс, кире килтереп сығарҙы, түшендәге тәңкәләрен һыпырҙы. Матур сыңлай, ҡыуанырғамы? Хөсәйен насар кеше түгел. Эсе яҡшылыҡ менән тулы... Бүребай аптырап иңбашын йыйырҙы, шунан күлдәкте йомарлап, усаҡ янына килеп баҫты. Эҫеле-һыуыҡлы булып китте ошо кисерештән. Юҡ, был бит бүләк. Иҫтәлек. Иҫтәлекте һаҡларға кәрәк. Бүләкте һандыҡ төбөнә һалды.

* * *

Полковник Пушкарев үҙенә килгән башҡорттарҙы оҙаҡ көттөрмәне.

- Ишҡар бей улы, тинегеҙме? Үткәрһендәр!

Бер аҙҙан йәнлек тиреләре күтәргән Хөсәйен, ике болан мөгөҙө тотҡан Бүребай күренде.

- Екатерина Федоровна өсөн бик яҡшы бүләк. Нисек ҡыуанасаҡ! Ә тиреләрҙе теге бүлмәгә, - тип ярҙамсыһына ишараланы. - Ҡатыным һеҙҙе күрергә теләй. Нишләптер, ул ошо малайҙы тәү күргәндән үк оҡшатты.

Семәрле оло ағас ултырғыста аҡ йөҙлө, түңәрәк күҙле ҡатын ултыра. Бүребайҙың ҡулындағы болан мөгөҙҙәрен күргәс, йөҙө яҡтырып китте. Иренә боролоп нимәләр һөйләне. Баш ҡаға-ҡаға уны тыңлаған Пушкарев төркисә тәржемәләне.

- Беҙ йәшәгән ҙур ҡалала бынан да ҙур болан мөгөҙө булмаясаҡ. Екатерина Федоровна ҡайтҡас, оло түрәләрҙең ҡатынына һеҙҙең турала һөйләйәсәк. Был икенсе мөгөҙҙө әхирәтенә бүләк итәсәк.

Бүребай элгестәге һанһыҙ ҡатын-ҡыҙ күлдәгенә иғтибар итте. Башҡорт ҡатын-ҡыҙы ундайҙы киймәй. Ят. Матур, әммә уңайһыҙ. Ана Пушкарев ҡатыны ла усмалап тотоп алды күлдәк итәген. Тау һымаҡ. Екатерина Федоровна йәнә нимәләр әйтте. Полковник тәржемә итте.

- Әсәйең бармы, малай?

Күҙендә ут тоҡанған "малай" өндәшмәне. Ҡатын урынынан торҙо ла, бер күлдәкте алып, Бүребайға һондо. Пушкарев тәржемә итте.

- Әсәйеңә булыр.

- Юҡ!

- Кем юҡ? - Пушкарев ҡабатлап һораны. - Әсәһе юҡмы?

Бүребайҙың йөҙөндәге үҙгәреште күреп, Хөсәйен яуап ҡайтарҙы.

- Эйе, шулай...

Екатерина Федоровна ғәфү үтенде, күҙен һөртөп алды.

- Ниндәй йәл... Ниндәй йәл!.. Ҡыҙғанам мин йәтимдәрҙе. Питерҙа ла уларға мәрхәмәтлек итергә тырышам. Мин Раббынан һинең әсәйең өсөн дә йән тыныслығы һорармын...

...Ныҡытмала булып ҡайтҡандан һуң Бүребайҙың элекке ҡырыҫлығы кәмене шикелле. Хөсәйен менән бергәләшеп Көһәпҡол ҡарттың күпме ҡарһүҙен тыңланы, тәүарихын ишетте. Бүребай асығыраҡ, яғымлыраҡ һымаҡ тойола Хөсәйенгә.

- Атайым ҡайтырға тейеш ошо көндәрҙә...

- Ваҡыт табып килеп сығырһың! Көһәпҡол олатай һине ярата бит.

- Тырышырмын, - Хөсәйендең тауышы элекке һымаҡ көр яңғырамай. Бүребай тауыштағы үҙгәреште тойҙомо, тегегә һынаған һымаҡ ҡарап тора, шунан тирә-йүнгә күҙен йүгертә, йылмая.

- Ә мин һәр саҡ азат ҡош. Ҡайҙа ла мине үҙ донъям көтә!..

- Ҡасан атайың менән күрештерәһең?

- Уның янына берәү ҙә бара алмай...

- Нишләп?

- Ул үҙе теләмәһә, берәү ҙә уны таба алмай...

- Нишләп ул мине күрергә теләмәһен?

- Һин уның менән күрешеүҙе ашыҡтырма. Кәрәкмәй...

- Нишләп улай тиһең, Аҡбүре? Мин ҡоҙа ебәрермен. Атайың был турала белергә тейеш бит.

- Ул бик һирәктәргә ышана.

- Миңә ышаныр, һәйбәт кейәү булырмын...

Бүребай көлә-көлә ары сабып китә. Сабып барған ыңғайға ағас ботағына йәбешә, һә тигәнсе үрмәләп ағас башына менеп тә китә.

-Миңә берәү ҙә, бер нәмә лә кәрәкмәй. Нимәгә һинең ҡоҙаларың? - көтмәгәндә тауышы әкренәйә. - Эйе, һин һәйбәт кейәү булырһың, тик...

Бер аҙҙан ул һикереп килеп төшә.

- Һиңә бәлә килгәндә мин ярҙам итә алмаясаҡмын.

Бынnetworkһы ниндәй һүҙ? Хөсәйенгә, бей улына, ярҙам, имеш!.. Нимә, Хөсәйенде ғәрләндергеһе, сығарынан сығарғыһы киләме? Аҡбүре нимәләр аңлатырға иткәндәй, егеткә ҡараны. Был ҡараштан тән сымырлап китте, ҡапыл йөрәк дарҫланы. Бүребай нимә әйтергә, иҫкәртергә иткәнен был егет аңламай һәм аңламаясаҡ...

Бына улар тағы ла йылға буйында. Ошонда Хөсәйен Бүребайҙың йөҙгәнен күҙәтеп торғайны. Бүребай ҙа шул мәлде иҫенә төшөрҙөмө, ҡапыл тегегә күтәрелеп ҡарап алды. Шунан һиҫкәнеп, үҙе лә һиҙмәҫтән, атының теҙгененә йәбеште. Алмасыуарына һикереп менде, атын ситкә ҡыуҙы. Ниндәй ҡараш һуң был? Ниңә Хөсәйен уға былай ҡарай? Нишләп был күҙҙәр күңелгә рәхәтлек бирә, ниндәй моң һала?

Ат тояғы тауышы ишетелде. Кемдер һыҙғырҙы. Был Хөсәйендең кешеһе булырға тейеш. Егет һыҙғырып яуап бирҙе. Йомағужа күренде.

- Хөсәйен, һөйөнсө! Сапҡын килеп етте. Атайың хәбәр ебәргән, өс көнлөк юлда...

- Миңә уны ҡаршы алырға кәрәк! Тиҙҙән күрешербеҙ, Аҡбүре! Яҙмыштарыбыҙ, үҙгәрер, Аллаһ бойорһа!

* * *

- Һинән, минән... нишләп буш хәбәр һөйләп тораһың?! - Ярһыуҙан бүртенгән атаһы уға ҡысҡыра.

Аҡбүре һандыҡты асты. Янғол уның ҡулындағы әйбергә төбәлде.

- Эйе, һүҙ шул турала бара! Был нимә?

- Бүләк, атай...

- Кемдән?

- Ишҡар бей улы биргәйне.

- Нимәгә ул һиңә?!

Аҡбүре күҙҙәрен сел-селт йомған килеш тора бирҙе.

- Һин артабанғы тормошондоң ҡалай булырын беләһеңме?

- Беләм. Мин бит яугир...

- Ошо бүләктән һуңмы?!

Аҡбүренең йөҙө ағарҙы. Янғол күлдәкте һелкә тартып алды ла бәрелә-һуғыла китте. Был ҡәһәрле йөктө Ишҡар бейҙең битенә бырҡтырырға! Юҡ, уны ошо сепрәк менән аҫып ҡуйырға!

- Эйе, тап шул көсөк бүләк иткән!.. - Янғол Гәрәйгә шулай тип әйтте лә ишек яңағына асыу менән килтереп һуҡты. - Мин Аҡбүрене ысын һуғышсы булыр тип уйлағайным! Ләкин ҡайҙалыр яңылышҡанмын...

- Бәлки, бала үҙ асылын тоялыр. Шуны эҙләйҙер...

- Эйе, дөрөҫ! Хәҙер ул минең яугирҙәрем хисабынан сыҡты!

- Уныһын ҡалай аңларға, Янғол ағай? Беҙ Хөсәйенде бер нисә тапҡыр эләктерә яҙғайныҡ та... Үҙеңдән бит рөхсәт булманы. Бей улы Аҡбүрене бик яҡын күрҙе. Ҡыҙ бала икәнен һиҙгән, шәйт.

Янғол уны ишетмәгәндәй, үҙе һорау бирҙе.

- Кейекбирҙе улына кәләш эҙләй инеме әле? Улы бик уҫал, донъя көтөрлөк кеше тип ҡарап ҡуйғайным.

- Аҡбүрене...

-Уны тоторлоҡ кеше кәрәк. Белеш.

- Аҡбүре ундай тормош көтә алмаҫ.

- Көтөр! Минең фармандан сыҡмаясаҡ!

Гәрәй ҡаршы әйтергә итеп ауыҙ асҡайны, Янғол көрәктәй ҡулын һелтәне.

- Ҡушҡанды үтә!

- Янғол, Ишҡар бей өлкән карауаны менән, оло бүләктәр, мал-монаят менән ҡайтып килә.

- Яҡшы, беҙ ҙә уға бик елле бүләк әҙерләп ҡуйырбыҙ. Улын ул беҙҙең янда ҡосағына аласаҡ...

Күрешеү шатлығын уйлаған Хөсәйен үҙенә тоҙаҡ әҙерләнгәнен, артынан күҙәтеп килгәндәрен дә абайламаны. Ҡоралланған ят әҙәмдәрҙе күргәс, ҡаушап ҡалдылар. Эргәһендәге кеше ҡолағас, Хөсәйен ҡылысын күтәрҙе.

- Яуға!..

Аяуһыҙ алыш башланды. Бер мәл Хөсәйендең арҡаһына нимә менәндер тондорҙолар. Иҫен юйған егетте Янғол кешеләре үҙҙәре белгән юл менән тау-урман эсенә алып инеп китте.

- Хәҙер Ишҡар бейҙе ҡаршы алырға кәрәк! Тик һаҡ ҡыланһындар. Беҙгә ул тере килеш кәрәк. Улын да саҡ үлтермәгәндәр!

Ҡараташ тауы ҡыуышлығында Хөсәйен иҫенә килде. Ул кипкән иренен саҡ асып бышылданы.

- Һыу...

Ҡалҡынырға итте. Арҡаһын урталай ҡырҡтылармы ни, "аһ..." тигән өн сығарҙы ла йәнә йығылды.

* * *

- Йәнбирҙе, нишләп бер үҙең? Ҡайҙа улым? Ана, тегеләр кемдәр?

Йәнбирҙе бейҙең һорауҙарына яуап бирә алмайынса, мөлдөрәп ҡарап тора бирҙе.

-Телеңде йоттоңмо, ҡороғор? Иҫән-һау ҡайтып килеүемә ҡыуанмайһыңмы әллә?

- Бей! - тип ялбарып өндәште Йәнбирҙе. - Хөкөм итмә мине.

- Әйт, йәһәтерәк! - Ишҡар бейҙең йөҙөнән йылмайыуҙы һыпырып алдылармы ни. - Кемдәр тегеләр? Кемдәрҙе эйәртеп килеүең?

- Эйәртмәйем, бей. Улар беҙҙе әсир итте.

- Хөсәйен! Ҡайҙа улым?

- Улар һинең үҙеңде генә һөйләшеүгә саҡыра...

Ишҡар бей кешеләре уҡ-яндарына йәбеште.

- Туҡтағыҙ!

Ишҡар бей ситтәрәк торған һыбайлыларға табан атланы. Тегеләр менән ниҙер һөйләшкәндән һуң, үҙ кешеләренә табан боролдо.

- Карауанды алып ҡайтығыҙ. Йорттағыларға сәләм әйтә торoғоҙ, - тине ҡарлыҡҡан тауыш менән.

Бер нисә юлдашы уның яғына ҡайырылғайны, һыбайлыларҙың ситтәрәк торғаны бейгә нимәләр әйтте. Ишҡар бей үҙенекеләргә туҡтарға ҡушып ишараланы. Һыбайлы әҙәмдәр бейгә үҙ аттарын бирҙе. Карауаны ул урман эсенә инеп киткәнсе урынынан ҡуҙғалманы.

Бейҙең башына нимәләр кейҙерҙеләр ҙә, ҡайҙалыр алып төшөп киттеләр. Оҙаҡ барҙылар, атынан төшөү менән бей ерҙә ятҡан Хөсәйенде күрҙе, йүгерә-атлай улы янына килеп теҙләнде.

- Улым! Нишләттеләр һине, зобаниҙар!

Яуап ишетелмәне. Бей яман итеп аҡырып ебәрҙе.

- Яралағандар! Язалағандар! Ҡаны ағып бөтөп үлә бит! Нишләүегеҙ был, ләғнәт төшкөрҙәр!

**(Дауамы бар).**

***✓ Эскиздарын ҡосаҡлап, рәссам үҙенә бағыусылар эҙләп йөрөй алмай, әлбиттә. Матурлыҡты күрә һалып, тотоп ала, күтәрә белеүсе эшлеклеләр кәрәк, ә рәссам ижад итергә тейеш.***

*ИЖАДХАНА*

**(Башы 1-се биттә).**

**Хәйер, таланттарҙың да иң маһирҙары, берәгәйлеләре, ысынлап та, Ер кешеһе түгелдер һымаҡ булып китә ҡайһы саҡ. Дөрөҫөрәге, бәлки, ошолайҙыр: талант эйәһе ерҙә йәшәй, ижад итә, мәгәр уның фекерләү ҡеүәһе асмандарҙы гиҙә, шуға ла Йыһандағы беҙ күрмәгәнде күрә, белә, ишетә, тоя улар. Шундай ғәжәйеп шәхестәребеҙҙең береһе булып сыҡты милләттәшебеҙ - Пермь башҡорто Рәфис Батырҡаев, рәссам, дизайнер һәм керамика оҫтаһы. Асман менән бәйле уйҙарға рәссамдың "Ҡурай моңо - Йыһан моңо" тип аталған картинаһы сәбәпсе булды.**

# БАТЫРҠАЙҘЫҢ МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯҺЫ...

## тамырҙарына тоташҡан

Тамыр ебәреп үҫкән еренән көс-ҡеүәт алып, ҡояшында ҡыҙынып, ай нурында ҡойонноп, ел-дауылда бәүелеп моңға түлләгән тәбиғәт мөғжизәһе - ҡурайҙан, әлбиттә, йыһан моңо түгелә! Ер менән икһеҙ-сикһеҙ мәңгелек Йыһанды тоташтырып тороусы моң күпере ләбаһа ҡурайыбыҙ...

Ғөмүмән, башҡорт тематикаһы Батырҡаев ижадында тос урын биләп тора. Илһөйәр рәссам ниндәйҙер осраҡлы сюжеттар менән мауыҡмай, уның эштәре бөтәһе бер тамырҙан, шиңмәй ҙә, һайыҡмай ҙа торған бер сығанаҡтан - халҡыбыҙ тарихын һәм хәтерен туплаған ауыҙ-тел ижадынан һут алыуы әллә ҡайҙан күҙгә ташлана. Был иң тәүҙә, әлбиттә, меңәрләгән быуаттар дауамындағы йәшәйешебеҙ энциклопедияһы, бөгөн логика, математика, астрономия кеүек аныҡ фәндәр нигеҙе тип танылыу алған үлемһеҙ "Урал



батыр" эпосы, башҡорт риүәйәттәре һәм хикәйәттәре. Халыҡ ижадын белмәй тороп, Рәфис Батырҡаев картиналарына асҡыс табыуы ауыр.

"Башҡортостан - атайсал", "Аҡбуҙат", "Сыңрау торна", "Аҡ бүре", "Бал ҡорт Land", "Ҡара юрға", "Башҡорт батыры", "Ыласын һунары", "Мөгөҙҙәрендә ҡояш илтеүсе болан" һәм башҡа шундай әҫәрҙәр тотош бер серияны тәшкил итһә, башҡорт халыҡ батырҙары - бөйөк шәхестәребеҙҙең портреттар галереяһы тарихи-документаль ерлектә генә түгел, бәлки, шул уҡ әлеге халыҡ традициялары нигеҙендә рәссам фантазияһы менән байытылып бирелгән.

Портреттар галереяһы "Башҡорт хан", "Башҡорт хан бөркөт һунарында" тип аталған картиналар менән асыла. Артабан - "Ҡараһаҡал", "Батырша", "Салауат Юлаев", "Салауаттың көрәштәше бригадир Батырҡай", "Ҡаһым түрә", "Исмәғил Тасимов", "Әбйәлил ишан", "Зәки Вәлиди", "Генерал Шайморатов" һәм башҡа шәхестәребеҙ тарих төпкөлөнән бөгөнгөбөҙгә һынсыл ҡараштарын төбәгән.

Батырҡайҙың үҙ ырыуы башҡорттары - ғәйнәләр тарихына арналған эштәре айырым бер тематиканы тәшкил итә. Мәҫәлән, мөгөҙҙәрендә ҡояшты илтеүсе болан образы уның күп әҫәрҙәрендә урын алған. Ғәйнә башҡорттары риүәйәтенән алынған был образ. "Әйнә, Ғәйнә һәм Тулуа"



тигән картина тап ана шул риүәйәткә нигеҙләнеп ижад ителгән. Ағалы-ҡустылы ике башҡорт батыры мәргән аусы ла булғандар. Һунарға улар боланға атланып йөрөгән. Бер саҡ болан тояғы менән тауҙы яра тибеп ебәргән. Туғандар ҡараһа, тауҙың икегә ярылып киткән урынында ҡояшты урлаған Тулуа тигән аждаһа йәшәп ята, ти. Батырҙар аждаһаны еңеп, ҡояшты ҡотҡарған...

Рәссамдың өйрәнелгән "берләм" юлдан ғына атламауын, ә үҙ оҫталығын төрлө стиль һәм жанрҙарҙа, шулай уҡ төрлө ысул һәм сараларҙа уңышлы һынауын күрергә мөмкин. Мәҫәлән, Р. Батырҡаев майлы буяуҙарҙы уңышлы ҡуллана, графикаһы ла ҡабатланмаҫ үҙенсәлеккә эйә. Бынан тыш, ул керамика һәм декоратив биҙәү-ҡулланма сәнғәте оҫтаһы ла. Әйткәндәй, уның өҫтәлгә ҡуя торған миниатюр скульптураларын, стенаға элеү өсөн сувенир тәрилкәләрҙе, нәфис формаларҙа башҡарылған графиндар, тоҙ, борос һауыттары, һыбыҙғылар, рельефтар, гербтар, биҙәнеү-ювелир әйберҙәре өлгөләрен күпләп етештереү эшен көйләп ебәргәндә, был зиннәтле сәнғәт әйберҙәрен һатып алырға теләүселәрҙән оҙон сираттар хасил булыр ине һымаҡ. Өҫтәүенә, был декоратив-биҙәү-сәнғәт әйберҙәренең башҡорт халыҡ сәнғәте традицияларында һәм стилендә башҡарылыуы, ҡабатланмаҫ милли орнамент һәм биҙәктәргә бай булыуы икеләтә ҡиммәт: ситтән килгән ҡунаҡтарға, илебеҙҙән алыҫтарҙа йәшәгән милләттәштәребеҙгә, шулай уҡ яҡындарыбыҙға, бер-беребеҙгә бына тигән бүләк тә булыр ине улар. Үкенескә күрә, рәссамдың ижад өлгөләре ҡағыҙҙарҙа, эскиздарҙа, йә булмаһа берҙән-бер нөсхәһендә килеш ҡалыуын дауам итә. Ниңә матурлыҡ үҙенә юл яра алмай? Әйтәләр бит, талант яҡлаусыһыҙ, тип. Хаҡтыр был, күрәһең. Эскиздарын ҡосаҡлап, рәссам үҙенә бағыусылар эҙләп йөрөй алмай, әлбиттә. Матурлыҡты күрә һалып, тотоп ала, күтәрә белеүсе эшлеклеләр кәрәк, ә рәссам ижад итергә тейеш.

Әйткәндәй, Рәфис Батырҡаев ижадында тағы ла бер мөғжизәле донъя - балалар тематикаһына ла киң урын бирелә. Был өлкәлә рәссам ғәжәп үҙенсәлекле юл тапҡан: башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәренә ул һүрәттәр ярҙамында аңлатма бирә. Мәҫәлән, уның "Халыҡ - илендә, балыҡ - күлендә", "Балдың төмен айыу белә", "Ҡурай тартһаң, көй була, бүрәнә тартһаң, өй була", "Ике кәмәнең ҡойроғон тота алмаҫһың", "Туным яҡшы, тип, түргә үтмә" һәм башҡа ошондай тематикаға һүрәттәр серияһы балаларға ғына түгел, өлкәндәр өсөн дә фәһемле. Тимәк, был программаһы арҡылы рәссам бер юлы бер нисә мәсьәләне хәл итә. Беренсенән, бала сюжетҡа ҡоролған һүрәт менән таныша, уны ентекләп ҡарай, анализлай. Икенсенән, мәҡәл, әйтемдәрҙең мәғәнәһен күргәҙмә рәүештә үҙләштерә,



иҫендә ҡалдыра. Өсөнсөнән, халыҡ аҡылынан фәһем, ғибрәт, тәрбиә ала. Ә инде ошондай сериянан мәктәпкәсә йәштәге балалар йәки башланғыс кластар өсөн "Әлифба", "Туған тел" дәреслектәре төҙөгәндә, кескәйҙәр хәрефтәрҙе лә тиҙерәк танып-белеү һәләтенә һәм тексты шәберәк уҡыу тиҙлегенә эйә буласаҡ. Ләкин былар әлегә хыял ғына шул.

Дөрөҫ, Рәфис Батырҡайҙы Пермь, Екатеринбург, Ырымбур, Орск, Силәбелә яҡшы беләләр ҙә, Башҡортостан сәнғәт һөйөүселәренә ул әле бигүк таныш түгел, сөнки әле һанап кителгән ҡала һәм өлкәләрҙә ул йыл һайын күргәҙмәләрен ойошторһа, беҙҙең республикала ни бары бер-ике тапҡыр, унда ла Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы сиктәрендә бигүк ҙур булмаған күргәҙмәһен ҡуя ҡуйыуын, тик ул барыбер күп халыҡ иғтибарына барып етмәй. Шуға күрә, башлап ебәреү өсөн, бәлки, Батырҡайҙың шәхси күсмә күргәҙмәһен ойоштороп, республика халҡын таныштырыу кәрәктер?

Әлегә тотош һорауҙар, проблемалар... Ҡайҙалыр башҡа илдәрҙә башҡа халыҡтар бындай үҙенсәлекле талант эйәләрен баһалай, күтәрә белер ине, моғайын. Ә беҙҙә,ниңәлер, талант үҙенә юлды ауырлыҡ менән яра. Сәбәбе билдәле инде: кеҫәһе ҡалындар тауышы булмаһа ла эстрада йондоҙо булып балҡый бит - ни хәл итәһең, заманы шундай. Күрәләтә күрмәлекле хеҙмәттәре була тороп та беҙҙең геройыбыҙ Батырҡай әле хатта Рәссамдар союзы ағзаһы ла түгел икән... Ә бит алған һөнәре буйынса ғына түгел, бөтә булмышы, йөрәге менән дә рәссам бит ул. Свердловск архитектура институтын бөтөргән. Дизайнер. Төрлө конструктор бюроларында, институттарҙа, фирмаларҙа эшләп, дизайн проектлауҙа ҙур тәжрибә туплаған. Екатеринбургта һәм Свердловск өлкәһендә "Батырҡай" сәнғәт, мәҙәниәт, дизайн буйынса берҙән-бер башҡорт студияһын ойоштороусы ла ул. Студияла даими рәүештә күргәҙмәләр эшләп килә. Керамика эштәрен ойоштороу буйынса бизнес-планы ла бар.

1999 йылда Рәфис Батырҡаев Екатеринбургта үткәрелгән ЮНЕСКО сараһында үҙенең ижад өлгөләре менән ҡатнашыу бәхетенә эйә була һәм сит ил ҡунаҡтарының юғары баһаһын ала. Эйе, сит күҙгә күберәк күренә, ә беҙ үҙебеҙҙең аралағы үҙ кешебеҙҙе байҡамай йөрөүебеҙ ҙә бар. Ана шулай булмаһын өсөн, ҡулдан килгән ярҙамды күрһәтеп, таланттарыбыҙҙы күтәрәйек, баһалайыҡ уларҙың бик тә лайыҡ эштәрен.

...Тыуған тамырҙары тартыуылыр: рәссам Батырҡай Өфөгә күсенеп килә. Үҙ илендә, үҙ халҡы араһында күңеле үҫһен, ижад ҡеүәте тағы ла баҙыҡланһын, мәгәр үрҙәр алдында баҙап ҡалмаһын, тип теләйек уға.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЗАМАН ТЕХНОЛОГИЯЛАРЫ... заман сирҙәрен тыуҙырамы?

■ Ғалимдар раҫлауынса, һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәй ала. Американың Джорджия штаты университетында ғүмерҙе оҙайтыу ысулдарын өйрәнеү буйынса ғилми эш алып барыла. Ғалимдар 2001-2009 йылдар араһында 100 йәшлек һәм унан да олораҡ 240 кешене тикшереп, ғүмер оҙайлығына тәьҫир итеүсе психологик һәм социаль факторҙарҙы асыҡлаған. Геронтология институты директоры һәм тикшеренеүҙәр авторы Леонард Пун оҙаҡ йәшәргә теләүселәргә тормошто тик ыңғай яҡтан ҡабул итергә кәңәш итә. Был оҙағыраҡ йәшәүҙең иң мөһим факторы.

■ Көсөргәнешле эштең файҙалы яҡтары ла күп. Мәҫәлән, ул кешегә тәмәке тартыуҙы ташларға ярҙам итә. Яңы тикшеренеүҙәргә ярашлы, кешенең хеҙмәт урынында эше күберәк һәм тығыҙыраҡ булған һайын, уның никотинға бәйлелеге түбәнәйә. Кельн ҡалаһы университетынан Анна Шмидт етәкселегендәге тикшеренеүселәр командаһы 197 тәмәке тартыусыны махсус тест аша үткәреп, эш урынында тынысыраҡ булған һайын, кеше шул тиклем йышыраҡ тәмәке тартыуын асыҡлаған.

■ Инженерҙар һәм ғалимдар заманса технологиялар ҡулланыу кеше өсөн хәүефле булыуын иҫкәртә. Голланд тикшеренеүселәре асыҡлауынса, бөгөн бик популяр булған Wi-Fi үткәргесһеҙ бәйләнеш стандарттары сәләмәтлеккә зыян килтереүе лә ихтимал. Нидерландтарҙағы Вагенинген ҡалаһы университетының бер төркөм ғалимдары Wi-Fi тулҡындары тәьҫирендә ағастарҙың япраҡтары ҡойолоуға иғтибар итә. Инженер Алистер Филипс фекеренсә, Wi-Fi-ҙың сигналдары кеше организмына ла насар йоғонто яһай һәм хатта тулһеҙлеккә килтереүе ихтимал. Бындай хәүефкә ноут-букты тубыҡтарына ҡуйып эшләргә яратыусылар дусар була. Ғалимдар әйтеүенсә, радиотулҡындар баш мейеһе эшмәкәрлеген дә насарайта.

■ Ғалимдар, йөҙҙәрендә миңдәре булған кешеләр ҡартлыҡҡа бирешмәй, тип белдерә. Һуңғы мәғлүмәттәргә ярашлы, тәндәрендә 100-ҙән ашыу миңе булған ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең һөйәктәре ныҒыраҡ була, тимәк, улар остеопороз сиренә бирешмәй. Бынан тыш, бындай кешеләрҙең йыйырсыҡтары аҙыраҡ була һәм шуға ла улар үҙ йәшенән уртаса 7 йәшкә йәшерәк күренә. Әлбиттә, миңле кешеләргә тире яман шеше лә янай, шуға ла уларға табиптар ҡояшта оҙаҡ ҡыҙынырға кәңәш итмәй. Әммә Лондон тикшереүселәре миңдәрҙең ыңғай яҡтары күберәк тип иҫәпләй. Ғалимдар хәҙер миңдәрҙең йөрәк һәм күҙҙәр сәләмәтлегенә йоғонтоһон тикшерә.

■ Канаданың төрлө университеттары ғалимдары көртмәле һутын антиэйдж продукттар исемлегенә индергән. Ҡомаҡтарҙа үткәрелгән лаборатор тикшеренеүҙәр барышында көртмәле һутының ҡандағы шәкәрҙе түбәнәйтеүе һәм тукымаларҙың инсулинға тәьҫирен көсәйтеүе асыҡланған. Был һутты 3 көн дауамында ҡабул иткән ҡомаҡтарҙың ҡандарында глюкоза күләме 35 процентка кәмегән. Тимәк, көртмәле һуты күп кешеләрҙә шәкәр диабеты һәм артыҡ ауырлыҡты булдырмауҙа ярҙам итәсәк.

БАШ ҠАЛА ҠУНАҒЫ

**"Ҡытай" һүҙе ҡолаҡҡа салыныу менән тәүҙә, нишләптер, осһоҙ тауарҙар, сифаты шиклерәк булған әйберҙәр иҫкә төшә. Йә булмаһа, баҙарҙарҙа рус телен вата-емерә булһа ла аңлашып торған милләт вәкилдәре күҙ алдына килә. Уларға ҡарап, бына бит кешеләр, нисек булһа ла көн итергә тырышып, эшләп йөрөй, тип тә уйламайһың. Тауарын тағы ла осһоҙораҡ хаҡҡа һатып алыу маҡсатында һатыулашаһың әле. Был ҡытайҙар барыһы ла шул рәүешле егелеп эшләп көн күрәләр, илдәрендә лә осһоҙло, сифатһыҙ әйберҙәр ҡулланып, бик ауыр йәшәйҙер, тигән һығымта ла яһап ҡуйыла.**

# ИРТӘНГЕ КҮНЕКМӘЛӘР...

## һәр ҡытай студенты өсөн мотлаҡ

### Тырыштар иле

Ошо ҡараш Башҡорт дәүләт университетына белем алырға килгән бер төркөм ҡытай студенттары менән танышып, ныҡлап аралаша башлағас ҡына үҙгәрҙе. Бәктиһән, Ҡытайҙың Ляонин провинцияһы үҙәге Шеньян ҡалаһында урышлашҡан Ляонин университеты менән бына инде бер нисә йыл тығыҙ бәйләнеш булдырылған икән. Был уҡыу йорто Ҡытайҙа иң көслөләр рәтендә, сит ил студенттарын уҡытыу унда 1965 йылда уҡ яйға һалынған. Бөгөнгө көндә Ляонин университеты 16 институт, 5 факультет һәм ҡырҡтан ашыу магистратура, ғилми советтар булдырған. Бында студенттарға 1003 уҡытыусы белем бирә, улар араһынан 522-һе профессор һәм доцент исеме йөрөтә. Университеттың рус филологияһы факультетында белем алған студенттар ҙа ошо уҡытыусылар ҡулы аҫтында шөғөлләнеп, сит ил уҡыу йорттарына килеп уҡый ала. Тап бына шул студенттар менән танышып, дуҫлашыу бәхете әлекте лә инде беҙгә. Яңы дуҫым, Ли Сяожу исемле ҡыҙыҡай ихлас күңелдән тыуған иле, ҡалаһы, университеты хаҡында һөйләне. Һәм Ҡытай - сифатһыҙ тауарҙар иле, ярлы хеҙмәткәрҙәр ере, тигән ҡарашты бөтөнләйе менән юҡҡа сығарҙы. Был ил егәрлеләр, тырыштар һәм ныҡыштар иле икән! Ни тиһәң дә, ике йыл эсендә рус телендә аралашырға, уҡырға, яҙырға өйрәнеүе еңелдән булмағандыр.

### Уҡыу системаһы башҡасараҡ

Ли Сяожу һөйләүе буйынса, Ляонин университетында көн тәртибе бик тығыҙ төҙөлгән. Иртән иртүк барлыҡ студенттар ҙа йоҡонан тороп, мотлаҡ рәүештә күнекмәләр яһарға сыға. Был ҡағиҙә студенттарҙың һаулығын нығытыу, көндө әүҙем уҙғарһындар өсөн булдырылған. Күнекмәгә сыҡмаусыларға өлгәшеү системаһына ярашлы билдәләнгән балдар ҡуйылмай. Был балдар һәр уҡыусының дәрес буйынса өлгәшен, университет тормошонда, төрлө конкурстарҙа ҡатнашыу кимәлен, йәмәғәтселек эшенә һәр төрлө әштәрҙә ваҡытында башҡарыу-башҡармауына ҡарап ҡуйыла. Ошо балдарға ҡарап, семестр һайын һәҙәмтәләр билдәләнә һәм йәйге сессиянан һуң стипендия түләнә. Сяожу уҡыған рус филологияһы факультеты яҡшы өлгәшеүселәргә, йәғни, йөҙ балл йыйыусыларға ике мең юань, беҙҙенсә 9300 һум тирәһе стипендия түләй. Был балдар сит ил юғары уҡыу йорттарында уҡыуҙарын дауам итергә теләүселәр өсөн дә бик мөһим. Тап ошо һәҙәмтәләргә һәм икенсе курс аҙағында бирелгән махсус имтиханға ҡарап, өсөнсө курста сит илдә белем алырға хоҡуҡлы студенттар исемлеге төҙөлә. Йыл дауамында төрлө сараларҙа, уҡыу программаларында әүҙем ҡатнашҡан, имтихандарын уңышлы тапшырған студенттар Рәсәйгә Башҡорт дәүләт университетына уҡырға ебәрелә. Әйткәндәй, Сяожу бында килеп белем алыу мөмкинлеге барлығын алдан белеп уҡырға ингән.

### Ҡытай студенты ашарға бешерә белмәй

Ляонин университетында, беҙҙәге кеүек, студенттар үҙҙәре ашарға бешермәй икән. Ундағы ятаҡтарҙа дөйөм аш бешереү бүлмәһе урынына ашхана урынлашҡан. Студенттар ошо ашханала ярайһы уҡ осһоҙ хаҡҡа туҡлана. Алты ҡатлы дөйөм ятаҡта ҡыҙҙар һәм егеттәр корпусы айырым төҙөлгән, бер бүлмәлә дүртәр студент йәшәй. Дәрестәр сәғәт иртәнге һигеҙҙә башлана. Унан һуң китапханаға, студенттар берлегенә, төрлө йыйылыштарға йөрөргә була. Китапханала рус классиктарын ҡытай телендә лә, русса ла уҡырға мөмкинселек бар. Ғөмүмән, китапхана бик бай был китапхана. Сяожу үҙе Достоевский, Пушкин, Толстой әҫәрҙәрен яратып өйрәнгән. Студенттар берлеге Ляонин университетында уҙғарылған һәр төрлө ғилми конференцияларҙа, уйын сараларында ҡатнаша. Хатта иртәнге күнекмәгә сыҡмаусыларҙы ла ошо ойошманың спорт бүлеге ағзалары контролдә тота икән.

### Билмән - Ҡытай милли ашы

Башҡорт дәүләт университеты һәм Ляонин университетын сағыштырып, Сяожу бында буш ваҡыттың күберәк булыуын билдәләй. Әйткәндәй, үҙаллы ашарға бешереүҙе ул студенттар өсөн бик тә файҙалы шөғөл, тип иҫәпләй. Рәсәйҙә үҙаллылыҡ, яуаплылыҡ тойғолары иртәрәк үҫешә, ти ул. Ҡытай ҡыҙы, Өфөгә уҡырға килгәнсе бешерергә белмәй инем, ярты йыл уҙыуға, өйрәндем, тип йылмая. Бындағы аштарға күнегеүе, дөгө урынына икмәк ашауы бигерәк тә ауырға тура килгән уға. Ә бына сәй эсергә һаман да өйрәнә алмай икән. Бәктиһән, уларҙа беҙ яратып эскән был эсемлекте тик ололар ғына ҡуллана, балалар һәм йәштәр һут, кола кеүек газлы эсемлектәр генә эсә. Миңең өсөн Сяожу һөйләгән ваҡиғалар араһынан иң сәйер яңылыҡ - Яңы йыл, уларса әйткәндә, Яҙ байрамы үткәргән саҡта билмән бешереү һәм билмәндең милли аш-һыу һаналыуы булғандыр. Билмәнде рус милли ашы тип һанайҙар ҙа инде, тиеүемә Сяожу үҙе лә аптырап ҡалды. Бәктиһән, уларҙа билмәнде Яҙ байрамы иртәгә була тигән төндә ғаилә менән ярым ай формаһында әҙерләп ҡуялар, ә байрам көнөндә бешереп, бар туғандар бергә йыйылып ашайҙар икән. Билмән ҡытай телендә "иҫкене оҙатыу һәм яңыны ҡаршы алыу" тигәнде аңлата икән, тағы ла был ашамлыҡ байлыкты символлаштыра.

Яҙ байрамы Ҡытайҙа иң оло байрамдарҙың береһе һанала. Кешеләр ишек алдын ҡағыҙҙан яһалған төҫлө фонарҙар менән биҙәй, ишек ситтәренә эленгән ҡыҙыл тасмаға ҡара буяу менән матур теләктәр яҙалар. Шулай уҡ ҡыҙыл конвертҡа аҡса һалып, туғандарға бүләк итәләр. Яңы йыл байрамында шартлатҡыстар, фейерверктар тауышы тынмай, был тауыштар яман көстәрҙе ҡыуалай, тип иҫәпләнә. Яңы йыл ай календары буйынса беренсе айҙың ун бишенсе көнөндә Фонарҙар байрамынан һуң тамамлана. Фонарҙар байрамында урамдарҙа төрлө фонарҙар яҡтыртыла, ҡағыҙҙан яһалғандары ла эленә. Был байрам тап ошо көндә Көнбайыш Хань династияһы императоры тәхетенә ултырған Веньди әмере буйынса ойошторолған тантанаға барып тоташа. Яңы император үҙенең тәхеткә ултырыуын халҡына урамдарға ҡыҙыл фонарҙар элеп, күңел асып ҡаршыларға бойора. Фонарҙар байрамында мотлаҡ урамдағы фонарҙарға ҡарап һоҡланып йөрөргә һәм тәмле эслекле дөгө ононан бешерелгән махсус пирожныйҙар менән һыйланырға кәрәк.

### Быуындан-быуынға тапшырылыр серҙәр...

Сяожуның әсәһе Цинь Иуюхуай ханым ҡытай медицинаһы буйынса Телин ҡалаһында шәхси поликлиника хужабикәһе. Ул быуындан быуынға күсә килгән был һөнәрҙе атаһынан үҙләштергән, бөгөн бүтәндәргә сисмәҫ серҙәрен өлкән ҡыҙына өйрәтә. Сяожуның апайы медицина университетын тамамлағандан һуң шәхси клиникаһын асырға хыяллана. Ҡытай медицинаһының төрлө ысулдары бар, әммә Цинь Иуюхуай ханымдың махсус рецепттарын оло ҡыҙынан башҡа бер кем дә белергә тейеш түгел. Ғаилә башлығы Ли Даовэй ташкүмер сығарыу заводында эшсе. Был татыу ғаилә күрше-күлəндәре араһында ҡарт ата-әсәләрен яҡшы тәрбиәләүе менән ихтирам ҡаҙанған. Сяожу үҙ сиратында ата-әсәһен ихтирам итә, киләсәктә улар яҡшыраҡ тормош көтһөн өсөн тырышып белем алаҫаҡмын һәм эшләйәсәкмен, тип үҙенә һүҙ биргән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ли Сяожу Башҡортостанда белем алыуына бик шатлана. Урындағы мәҙәниәтте төптәнерәк өйрәнергә, рус телен тағы ла яҡшыраҡ белергә ынтыла. Алсаҡ, мөләйем был ҡыҙ Башҡортостанда тапҡан дуҫтары хаҡында ғорурланып һөйләй, уларҙың ҡунаҡсыл, ярҙамсыл, булыуына һоҡлана. Бында ҡыҙҙар барыһы ла һылыу, бейек үксәле аяҡ кейемендә йөрөй, ә беҙҙә улай үксәле аяҡ кейеме кейеүселәр һирәк, ти. Ҡала урамдары буйлап йөрөргә яратҡан Сяожу тәмәке тартҡан ҡыҙҙарға ҡарап аптырауын да йәшермәй. Һаулыҡтарына килтергән зарарҙы һуңлап аңларҙар инде, тип борсола. Тағы ла уны аптырашта ҡалдырғаны - милиция хеҙмәткәрҙәренең урамда уларға шикләнеп ҡарауы. Шунлыҡтан һаҡ йөрөйбөҙ, үҙ-ара шым ғына аралашырға тырышабыҙ, ти Сяожу. Ләкин нисек кенә булмаһын, ҡытай ҡыҙы бында алған тәьҫораттары менән бик ҡәнәғәт. Ә яңы дуҫтары менән бәйләнеште тыуған иленә ҡайтҡас та һаҡлап ҡалырына ышана.**

**Лилиә ҒӘЛИМОВА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# АТА-ӘСӘЛӘР МЕНӘН...

## Аллаһы Тәғәлә араһында кәртәләр юҡ



**Ислам ата-әсәләрҙе хәстәрләүгә ҙур иғтибар бүлә. Ихлас күңелле һәр мосолман ата-әсәһе уға изге доғалар әйтһен өсөн барыһын да эшләргә тейеш. Бындай изгелек Аллаһы Тәғәлә тарафынан шунда уҡ ҡабул ителә. Рәхмәтле кешеләргә бәрәкәт алып килә торған айырым доғалар булыуы ла билдәле. Шулай уҡ бәддоға ла (изге булмаған теләктәр) Аллаһы Тәғәлә тарафынан кисектереүһеҙ ҡабул ителә. Сөнки Аллаһы Тәғәлә алдында ата-әсәләргә ҡағылышлы бөтә нәмә лә мөһим. Уларҙың доғаһы тәрән тойғолар менән ҡылына, ата-әсәләр менән Аллаһы Тәғәлә араһында кәртәләр юҡ. Шуға күрә һәр кем ата-әсәһенең изге фатихаһын алырға һәм уларҙың ризаһыҙлығын тыуҙыра торған бөтә нәмәнән ҡасырға тырышырға тейеш.**

Һәр ата-әсә үҙенең сабыйын ярата, шуға күрә, хәстәрләүҙәренә ҡарамаҫтан, балалары уларға тупаҫлыҡ йәки рәхимһеҙлек менән яуап бирһә, Аллаһ алдында ата-әсә хәле ғәйепһеҙгә кәмһетелгән кешегә тиң. Ә ғәйепһеҙгә ҡыйырһытылған кешеләрҙең доғаһы иң элек ҡабул ителеүе билдәле. Беҙгә һәр ваҡыт ата-әсәнең хуплауын алырға кәрәк, сөнки бел бәддоғанан һуң алынған һынауҙарҙан ҡотолоуға ҡарағанда күпкә еңелерәк.

Бәддоғанан ҡотолоп, доға алырға тырышыу бик мөһим. Һәр мосолман ата-әсәһе тере саҡта уларға изгелек эшләргә һәм улар өсөн доға ҡылырға тейеш. Шулай уҡ улар был донъянан киткәс тә изгеләктәр ҡылыуҙы туҡтатырға ярамай. Бер ваҡыт Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер кеше килгән дә: "Үлгән атай-әсәйең өсөн изгелек булырҙай, улар өсөн башҡара торған нимдәйҙер эш бармы?" - тип һораған. Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) дүрт эште атап үткән: "Улар өсөн доға уҡырға, Аллаһы Тәғәләнән уларҙы ғәфү итеүен һорарға; теүәл итеп һуңғы теләктәрен үтәргә һәм дуҫтарына, туғандарына ҡунаҡсыл булырға, уларға ярҙам итергә". Ошо ҡағиҙәләрҙең бөтәһен дә үтәү мәрхүм булып ҡалған ата-әсәне ҡыуандырасаҡ.

Мәрхүмдәр өсөн доға бик файҙалы, шуға күрә балалар Аллаһы Тәғәләнән уларҙы ғәфү итеүен һорарға тейеш. Шул саҡта теге донъяла ата-әсәнең хәле яҡшырыр.

Бер ваҡыт Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер кеше килеп, әсәһенең үлеп ҡалыуы һәм уның васыят ҡалдырмауы тураһында әйткән һәм әсәһе урынына саҙаҡа таратыуҙың файҙаһы буламы, тип һораған. Быға Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ыңғай яуап биргән. Шуға күрә, әгәр мосолмандар ата-әсәһенең яҙмышын еңеләйтергә һәм теге донъяла уларҙың дәрәжәһен күтәрергә теләһә, улар сауабы ата-әсә өләшөнә яҙылһын, тигән ниәттә изге эштәр башҡарырға тейеш. Изгелекле ул атаһының яҡындарына һәм дуҫтарына хөрмәт менән ҡарарға, хәлдәрен белергә һәм уларға хәленән килгәнсе ярҙам итергә тейеш.

Бер көндө Ибн Ғүмәр юлында бер бәдәүендә осраҡан. Уның атаһы Ғүмәрҙең (радиаллаху анху) яҡын дуҫы булған. Улар бер-береһен таныған һәм Ибн Ғүмәр ҙур булмаған бүләк эшләргә булған - башындағы салмаһын һәм үҙенең ишәгән теге кешегә бүләк иткән. Бәдәүен был ҙур бүләкте күреп, бик тулҡынланған, ҡаушаған һәм: "Әгәр һеҙ миңә ярҙам итергә теләйһегеҙ икән, миңә ике тин аҡса бирһәгеҙ ҙә етерлек булыр ине", - тигән. Был һүҙҙәргә Ибн Ғүмәр Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Атайыңдың дуҫы хаҡында ҡайғырт, уға ярҙам ит, бүләктәр бир һәм хөрмәт күрһәт, улар менән араңды өҙмә. Сөнки былар барыһы ла һинең иманыңды нығытасаҡ",- тигән хәҙисен килтереп үткән.

Йәғни, ата-әсәһенең туғандары һәм дуҫтары тураһында ҡайғыртыу мосолмандың тағы бер вазифаһы булып тора. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) кешеләрҙең бер-береһенә ышаныслы мөнәсәбәтен, мөхәббәт һәм ышаныс атайҙан уларына тапшырыла, тигән хәҙистәр менән нығытҡан. Шуға күрә балалар ата-әсәләренең туғандарын һәм яҡындарын хөрмәт итергә тейеш.

Исламда ата-әсәләр янында үҙендә нисек тоторға кәрәклеге тураһында айырым ҡағиҙәләр ҙә бар. Ата-әсәнән алда бармаҡҡа һәм бергә булғанда уларҙан алда ултырмаҡҡа кәңәш ителә. Кеше үҙенең атаһына исеме менән өндәшмәҫкә, ә "атай" тип әйтергә тейеш. Был мосолмандың әҙәбе.

Ата-әсәләр өсөн иң мөһиме, ҡартайғас та балаларының уларға ыңғай мөнәсәбәте һәм уларға ихлас ярҙам итеүе. Ата-әсәләргә булған мөхәббәт мосолмандың рухи кимәлен күтәрә, уның әхлағын күркәмләй һәм башҡа кешеләр араһында абруйын арттыра. Сөнки йәмғиәттә дәрәжә ата-әсәләргә булған мөнәсәбәт менән билдәләнә. Шуға күрә үҙенең атаһы менән әсәһенә яҡшы мөнәсәбәттә булған кеше изгелекле һанала, йәмғиәт тә ата-әсәһен хөрмәт иткән мосолман бөтә кешеләргә лә хөрмәт менән ҡарай икәненә ышана.

# ДОҒАЛАРЫҒЫҘ ҠАБУЛ БУЛҺЫН -

## "Амин" һүҙен йышыраҡ әйтегеҙ

Әбү Хөрәйрә риүәйәтенә ҡарағанда, Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тигән: "Имам намаҙҙа "Фатиха"нан һуң "Амин" тигәс, һеҙ ҙә "Амин" тип әйтегеҙ. Сөнки һәммәгеҙҙең дә "Амин" тип әйтеүе фәрештәләрҙең "Амин" тигән ваҡыттарына тура килһә, элек ҡылған гонаһтарығыҙ ярлыҡаныр".

Икенсе бер хәҙистә былай тиелгән: "Һеҙҙең арағыҙҙан берегеҙ "Фатиха"нан һуң "Амин" тигәндә, фәрештәләр ҙә күктә "Амин" тиһәләр, йәғни бер әйтеү икенсеһенә тура килһә, ул кешенең элек ҡылған гонаһтары ярлыҡаныр".

Ибн Ғәббәстең (радиаллаху анху) риүәйәте буйынса, Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тигән: "Йәһүдтәр һис бер нәмәгә лә һеҙҙең "Амин" тигән һүҙегеҙгә көнләшкән тиклем көнләшмәй. Шуға күрә "Амин" һүҙен йышыраҡ әйтегеҙ".

Әнәс бин Мәлик (радиаллаху анху) риүәйәттәрендәге хәҙис тағын да тәфсиллерәк: "Миңә намаҙҙа һәм доғала "Амин" бирелде. Бынан элек берәүгә лә бирелмәгән. Бары тик Мусаға ғына бирелгән, сөнки Муса доға ҡылған. Һарун да "Амин"ды әйткән. Шуның өсөн һеҙ ҙә доғанан һуң "Амин" тип әйтегеҙ".

Хәҙис-шәрифтәрҙән күренеүенсә, "Амин" һүҙе "Фатиха"нан һәм бөтөн доғаларҙан һуң әйтелергә тейеш.

"Амин"дың әйтелеүе хаҡында төрлө мәҙһәбтәр араһында ҡайһы бер айырмалар бар. Шәфиғый мәҙһәбе ғалимдары раҫлауынса, "Амин"ды ҡысҡырып әйтеү тейешле. Ләкин Хәнәфи мәҙһәбендәгеләр был һүҙҙе намаҙҙан һәм доғанан һуң күңелдән генә әйтә.

Шулай итеп, намаҙҙы сәләм менән тамамлаған кеүек, доғаларыбыҙҙы "Амин" менән тамамларға тейешбеҙ. "Амин" һүҙе "Аллаһым, ҡабул ит", "Шулай булһын", "Өмөттәребеҙҙе юҡҡа сығарма" кеүек мәғәнәләргә тура килә.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Яҙмышыңды яҡшыртыу өсөн тәбиғәттән нисек ярҙам алырға

Бөйөк мәҙәниәт булдырған боронғо грektар бик йыш тәбиғәтте күҙәтеп, унан илһам алған.

Мөхәббәт һәм матурлыҡ алиһәһе Афродита үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһында янынан тыуыу һәләтенә эйә булған. Ҡая аша тишеп сыҡҡан тамырҙар, елдең көсө һәм һыу ташыу, һыу ҡайтыуҙарҙың еңелмәҫ көсө грektарҙы Аполлон тураһындағы күҙаллауҙарға илһамландырған.Тәбиғәт һыҙаттары грек колонналарында һәм башҡа архитектура мотивтарында сағылыш тапҡан.

Бөгөн беҙ тәбиғәттән, шулай итеп Илаһтан, айырылғандан айырыла барабыҙ. Бетон һәм суйын диуарҙар беҙгә ағастар һәм үләндәр биргән энергияны бирмәй.

Тәбиғәт мейенең уң яҡ ярымшары ярҙамында Ижадсы менән әүҙем бәйләнеш программалауҙа ярҙам күрһәтә ала. Паркта йәки яланда йөрөүҙән максималь файҙа алыу өсөн аңығыҙҙы үләндәрҙә, ҡыуаҡтарҙа һәм ағастарҙа булған йәшәү көсөнә йүнәлтегеҙ. Уларҙың ярҙамын физик терәк итеп кенә тоймағыҙ, ә энергетик һут биреүсе итеп ҡабул итегеҙ. Үҙҙәренең булмышы, ҡыштырлауы, еҫе аша улар һеҙгә Илаһ менән бәйләнештә булыуын хәбәр итә икәнен тойоғоҙ.

Тәбиғәт донъяһы буйлап яҡшы, әүҙем сәйәхәт ҡылыуҙан тыш, Филлс Диллер әйткән "яҡшы, әүҙем ултырыу"ҙы ла күҙ уңынан ысҡындырмау файҙалы. Ултырып, күҙҙәрегеҙҙе йомор һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алып, үҙегеҙҙең яҡты нурға сорналған Юғары Минегеҙҙе күрер өсөн тәбиғәттән дә ҡулай урын табып буламы икән?! Бүрәнәлә, үләндә, шәп ағыусы йылға эргәһендә унайлы итеп урынлашып, бер нисә секундҡа көсөргәнештән ҡотолоп, бер нисә тапҡыр тәрән итеп тын алып, Ижадсыны яратығыҙ...

Күрерһегеҙ, был һөйөү ике яҡлы.

### Ыңғай фекерләү өсөн уйҙарында таҙарыныу шарт

Тәбиғәткә һоҡланып, һеҙ ыңғай фекерләү юлында бик күп ҡаршылыҡтарҙан ситләшәһегеҙ. Бындай кәртә булып йыйыштырылмаған өй, эштәге ҡыйынлыҡтар, кире энергия биргән һүҙҙәргә көндәлек тормошта ҡулланыу ғәҙәте тороуы ихтимал. Быларҙың һеҙҙе сикләнгән һәм пессимистик фекерләргә мәжбүр итеүен танығас, һеҙ уйығыҙҙа таҙарыныуға программалаша алаһығыҙ.

Өйөгөҙҙә йыйыштырмағанһығыҙмы? Көсөргәнештән арынығыҙ ҙа, уйығыҙҙа соланығыҙҙы, гаражығыҙҙы, өй башын һәм башҡа бысраҡ урындарығыҙҙы таҙартыуығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Быны бер нисә тапҡыр ҡабатлағас, тузып ятҡан кәштәләргә, кәрәкмәгән әйбер өйөмдәренә башҡаса түҙеп торор көсөгөҙ юҡ икәнен аңларһығыҙ. Иртәме-һуңмы, һеҙ йыйыштырыныу өсөн ваҡыт табырһығыҙ. Был физик таҙалау ғына түгел, уйҙарҙа таҙалау ҙа буласаҡ.

Хәҙер эш тураһында. Ни тиклем күберәк эшләһәгеҙ, һеҙгә шул тиклем күберәк өйләр, ә етәксегеҙ сәбәп булһа ла, булмаһа ла һеҙҙе әрләй. Һеҙгә эшегеҙҙе яҡшыраҡ итеп ойоштороrға кәрәк. Уйҙарығыҙға тәьҫир итеү һәм тормошҡа ҡарашығыҙ күҙлегенән ҡарағанда, был йыйыштырылмаған өйҙән яҡшыраҡ түгел. Ыңғай фекерләү һәләтен һәм "теге яҡтан" ярҙам алыр өсөн һеҙгә уйҙа ғына таҙарыныу кәрәк. Тап шулай, көсөргәнештән арынып, һеҙ үҙегеҙҙең өй таҙалағанығыҙҙы күрҙегеҙ, тап шул рәүешле эшегеҙҙең тәртипкә һалынғанын да күрерһегеҙ.

**Роберт СТОУН.**

*ҠАРА ҺИН УНЫ!*

# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ЯУЫЗЛЫҠ БӨРТӨКТӘРЕ,

## йәки Һыуҙың аңы бармы?

**Ҡар бөртөктәренең барыһы ла бер иш, уларҙың формалары ла, биҙәктәре лә оҡшаш, тип уйлап яңылышабыҙ, имеш. Ҡар - ҡыштың бер билдәһе генә түгел икән. Баҡтиһәң, ҡар бөртөктәре Ергә изгелек һәм яуызлыҡ алып килә ала. Быны ярты быуатҡа һуҙылған тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә Санкт-Петербург ғалимдары асыҡлаған.**



Һуңғы йылдарҙа япон тикшеренеүсеһе Масару Эмотоның китаптарын уҡымаған, фильмдарын ҡарамаған кеше ҡалмағандыр, моғайын. Уның иҫбатлауынса, һыу яҡшылыҡ һәм яманлыҡты айыра белә. Яҡшылыҡҡа ул ғәҙәти булмаған матур конструкцияларҙан торған ҡар бөртөктәре менән яуап бирә. Ә "Гитлер" тип яҙылған һауыттағы һыуҙан барлыҡҡа килгән ҡар бөртөгө ҡарар күҙгә үтә йәмһеҙ була...

А. Воейков исемендәге Баш геофизика обсерваторияһының физика лабораторияһы ғалимдары үҙең теләгән рәүештәге ҡар бөртөктәрен яһау мөмкинлеге тураһында Япония ғалимы асышына тиклем ярты быуат элек белгән һәм тикшеренеүҙәр үткәргән. Уларҙың каталогында бөгөн йөҙәр мең төрлө ҡар бөртөгө йыйылған да инде. Дөрөҫөн әйткәндә, совет ғалимдары һыуҙың хәтерен эҙләмәй. Улар ҡар бөртөгө рәүеше һәм сифаты буйынса атмосферала барған процестарҙы аңларға тырыша.

Тәү ҡарашҡа ғына бар ҡар бөртөктәре лә алты ҡырлы кеүек күренә. Әсынында иһә улар түңәрәк тә, 12 ҡырлы ла, оҙонса ла, тамсы кеүек тә, энәгә оҡшаш та булыуы ихтимал. Барыһы ла температураға, атмосфераның дымлылығына, болоттағы электрик тәьҫирҙәргә, ваҡ ҡына саңдарға бәйле. Физика-математика фәндәре кандидаты, лаборатория мөдире Юлия Довгалюк әйтеүенсә, температураның бер тигеҙ күтәрелеүе йәки түбәнәйеүе һөҙөмтәһендә ҡар бөртөктәренең формаһы ла бер төрлө үк үҙгәрә. Әгәр ҙә яһалма болот ярҙамында саңға оҡшаш матдәләр һипһәң, был ҡар бөртөктәренә үҙенсәлекле рәүеш бирәсәк һәм өҫтөбөҙгә яуған ҡарҙарҙың биҙәктәре төрлө-төрлө буласаҡ. Тимәк, ҡар ярҙамында атмосфераның бысраныуы кимәлен, уны нимә бысратыуын да билдәләргә мөмкин.

Ҡар бөртөгөнөң ҙурлығы болот ябыуының бейеклегенән тора. Ул болоттан ергә хәтлем ни тиклем оҙағыраҡ оса, шул тиклем эрерәк була. Билдәле булыуынса, XIX быуаттың аҙағында Американың Монтана штатында диаметры - 40, ҡалынлығы 20 сантиметрлыҡ ҡар яуа. Мәскәүҙә иң эре ҡар 1944 йылдың яҙында яуа - улар оло кешенең усы ҡәҙәре ҙурлыҡта була.

Төньяҡ-көнбайыш техник университеты профессоры, Рәсәй тәбиғи фәндәр академияһы (РАЕН) академигы Константин Комаровских белдереүенсә, һыуҙың хәтере бар һәм ул үҙе аша Йыһандың уйҙарын үткәрә. Ғалим төрлө һынауҙар үткәреп ҡарағандан һуң, бының ысынлап та шулай булыуына төшөнә. Шулай булмаһа, ни өсөн бер-береһенә ҡапма-ҡаршы булған һүҙҙәр яҙылған һауыттарҙа туңған боҙ төрлө рәүештә була?

Быңдай эксперименттарҙан көлөп ҡарарға ла була, әлбиттә. Тик миҙалдың икенсе яғы ла бар бит әле. Кеше организмының нисә проценты һыуҙан тора, иҫләйһегеҙме? Һәм ошо һыу изге һәм насар хәбәрҙәрҙе, уйҙарҙы яҡшы тоя. Ҡан һәм лимфала, баш мейеһе ҡабығында һәм мускул туҡымаларындағы һыу, ҡар бөртөктәре кеүек үк, асыуҙан һәм яуызлыҡтан насарая, изге һүҙҙәрҙән, матур уйҙарҙан, киреһенсә, сафлана.

**Был бәйләнештәрҙе ғалимдар аңлата алмаһы ла, кире лә ҡаҡмай. Тимәк, изгелек һәм матурлыҡ - сәләмәтлеккә, ә кире уйҙар ауырыуға һәм үлемгә килтерә. Фән генә түгел, ҡар бөртөктәре лә быны беҙгә көн һайын дәлилләп тора - һүҙҙәребеҙ һәм ҡылыҡтарыбыҙ ниндәй, тормошобоҙ ҙа шундай.**

*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

# АЛҠА ТАРИХЫ

**Ҡатын-ҡыҙҙарҙың иң яратҡан биҙәнеү әйбере булған алҡаларҙың тарихы бик ҡыҙыҡлы. Гректар, римляндар, фарсылар, египетлылар алҡаларҙың тылсымлы үҙенсәлеге бар, тип иҫәпләгән һәм уларҙы амулет, бетеү кеүек тағып йөрөгән. Алҡалар кешене төрлө сирҙәрҙән һаҡлай, тип һаналған.**

Боронғо грек алҡалары төрлө хайуан һындарын кәүҙәләндергән. Йылан һынындағы алҡаларҙы тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына йөрөткән. Ир-егеттең ҡолағындағы алҡа уларҙың ҡол икәненә ишаралаған. Ә урта быуаттарҙа француз короле Генрих III ваҡытында иһә, киреһенсә, юғары ҡатлам ир-егеттәре алҡа йөрөтөргә тейеш булған. Яңырыу осоронда итальян оҫталары алҡаларҙы ҡиммәтле таштарҙан һәм эре ынйыларҙан эшләгән. Был биҙәүестәр популяр ғына түгел, ә бик ҡиммәтле һаналған.

XVI-XVII быуаттарҙа Европала алтын алҡалар моряк костюмдарының атрибуты һаналған. Инглиз һәм голланд моряктары уларҙы һул ҡолаҡтарына таҡҡан. Быңдай моданың ғәмәли аңлатмаһы ла бар. Ул ваҡыттарҙа "диңгеҙ бүреләре" йыш ҡына кәрт уйнаған, хатта сит яҡтарҙа үлеп ҡалған осраҡтар ҙа булған. Кәрт бурыстарын нисек ҡайтарырға һәм ерләү өсөн түләргә? Бын шул саҡта алтын алҡаның кәрәге тейгән. Алтын алҡаның ҙурлығы моряктың тәжрибәһе тураһында фекер йөрөтөргә мөмкинлек биргән. Ҡурҡыу белмәҫ йөҙөүселәрҙең ҡолаҡтарындағы иң ҙур алтын алҡалар батырлыҡ символы булған. Ун етенсе быуатта алҡа модаһы бөтә Европаны солғап ала. Уларҙы бигерәк тә гүзәл зат яратҡан. Тәүҙә алҡалар груша рәүешендәге ынйыны, аҙаҡ иһә бер яғынан ҡиммәтле таш, ә икенсе яғынан эмаль менән биҙәлгән муйынсаны хәтерләткән.

Ун һигеҙенсе быуатта модаға оҙон тамсы рәүешендәге аҫылмалы алҡалар инә. Уларҙы ҡолаҡ артына матур таҫма менән нығытып ҡуйғандар. Рококо осоро һәр ваҡыт хәрәкәттә булған - тауыш сығарған, ҡояш нурҙарында йым-йым килгән, күҙҙең яуын алырлыҡ "бриолез" алҡалары менән дан ҡаҙана. Рококонан һуң классицизм осоро килә. Ул ваҡытта ябайлыҡҡа һәм ҡәтғилеккә өҫтөнлөк бирелә. Шуға биҙәүес әйберҙәрҙе лә ябай итеп эшләй башлайҙар. Һуңыраҡ алҡа-камеялар килеп сыға. Ун туғыҙынсы быуаттың беренсе яртыһында немец сәнғәтендә "бидермейер" тип аталған яңы йүнәлеш барлыҡҡа килә. Ул осорҙағы биҙәүестәр араһында полихром алтынынан эшләнгән алҡа популяр була.

Халыҡ араһында киң таралған алҡалар менән бер рәттән, ҡайһы ваҡыт сәйер алҡалар ҙа осрап ҡуя. Уларҙы кескәй генә аквариум, үрмәксе булған һауыт формаһында ла эшләйҙәр. Күптән түгел серәкәйҙәргә ҡаршы матдә ҡушылған алҡа уйлап сығарыла.

*КОТЛАЙБЫҘ!*

Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылында йәшәүсе ҡәҙерле атайыбыҙ **Иҙелбаев Миңнехәт Ғариф улын** тыуған көнө менән бөтә йөрәктән ҡотлайбыҙ!

Бөтмәҫ шатлыҡ-ҡыуаныстар, ҡоростай һаулыҡ, оҙон ғүмер насип итһен Хоҙай Тәғәлә һиңә, атай! Беҙ һине яратабыҙ!

**Бөтә балалары исеменән, Өфөлә йәшәүсе ҡыҙы Фәүзиә һәм уның ғаиләһе.**

* * *

Ҡыш миҙгеленең ябалаҡлап ҡына ҡар яуған иң гүзәл көнөндә Бөрйән районы Ҡолғана ауылында йәшәүсе донъялағы иң яҡын кешебеҙ, ғәзиздәрҙән-ғәзиз ҡәҙерле әсәйебеҙ **Айытбаева Зәйтүнә Шаһит ҡыҙының** тыуған көнө. Беҙҙең әсәйебеҙ иҫ киткес сабыр, аҡыллы, көслө рухлы, шиғри күңелле кеше. Ул беҙҙең барыбыҙға ла матур тәрбиә биреп, оло тормош юлына аяҡ баҫтырҙы. Беҙҙең өсөн ҡылған изгелектәре өсөн уға күпме генә рәхмәт әйтһәк тә аҙ булыр кеүек. Ҡәҙерлебеҙҙе байрамы менән ҡотлап, Аллаһы Тәғәләнән уға оҙон ғүмер, бәхетле ҡартлыҡ, һаулыҡ-сәләмәтлек теләп ҡалабыҙ. Балаларыңдың, ейән-ейәнсәрҙәреңдең игелек-изгелектәрен күреп, яҡындарыңды һөйөндөрөп, барыбыҙға ла терәк-таяныс, кәңәшсе булып, тормош ҡыуаныстары менән тулы, бәхетле, оҙон ғүмер үтергә насип булһын һиңә!

**Ҡотлау менән бөтә балаларың, ейән-ейәнсәрҙәрең.**

*ЙӘШЕЛ ДАУА*

# ТИЛЕБӘРӘН



Тилебәрәндең сәскә атыу фаҙаһы ваҡытында үләнен, орлоҡтарын һәм тамырын ҡулланалар. Уның препараттары күп осраҡта һөртөнөп дауаланыр өсөн ҡулланыла. Спиртлы төнәтмәһен үҫемлек майы менән ҡатыштыралар һәм ревматизм, подагра ваҡытында һөртәләр. Япраҡтары төнәтмәһенән сылатҡыстарҙы сиҡан йәки ҡуш сиҡандың тәүге билдәләре күренгәс тә ауыртҡан урынға һалалар. Орлоҡтарынан майҙа май эшләйҙәр һәм һөйәк туберкулезы булған осраҡта тыштан һөртәләр. Тилебәрәндең боҫламалары эс ауыртҡанда файҙалы. Һабағының һуты теш һыҙлауын баҫа.

Тилебәрәндең көслө ағыу икәнен бөтәһе лә белә. Был турала Әбүғәлисина ла: "Тилебәрән - аҡыл алмашыныуға килтереүсе, хәтерҙе юйыусы, тын бөтөрөүгә килтергән ағыу", - тип әйтеп ҡалдырған. Шуныһын да әйтеп үтергә кәрәк, тип һанайбыҙ: тилебәрәндең орлоҡтары япраҡтарына ҡарағанда ағыулыраҡ.

**Подагра, ревматизм, нервы ауырыуҙары.** 3 балғалаҡ төйөп ваҡланған ҡоро тилебәрән орлоғона 10 балғалаҡ көнбағыш майы ҡойоп, 10 көн төнәтергә. Тилебәрән майы ауыртҡан урындарҙы ыуыр өсөн ҡулланыла.

**Эске ағзаларҙың көслө ауыртыуы, теш һыҙлау.** Ярты литрлыҡ быяла банканың дүрттән бер өлөшөнә кипкән япраҡтарҙы һалырға, тулғансы араҡы ҡойорға һәм ҡараңғы урынға ҡуйып төнәтергә кәрәк. Һарҡытырға. Эске ағзалар ныҡ ауыртҡан ваҡытта бер ҡалаҡ һыу менән 2 тамсы ҡабул итергә. Теш һыҙлаған ваҡытта мамыҡты сылатырға ла ауыртҡан тешкә бер нисә минутҡа һалырға кәрәк. Һыҙлыу үткәнсе бер нисә тапҡыр эшләргә кәңәш ителә.

Тилебәрән препараттарын тик тәжрибәле фитотерапевт ҡына тәҡдим итә ала. Тилебәрән эске күҙ баҫымын күтәрә, шуға күрә глаукома ваҡытында, шулай уҡ тахикардия, аритмия, экстрасистология менән оҙатылып килгән йөрәк ауырыуҙары булған осраҡта ла ҡулланыу ҡәтғи тыйыла. Тилебәрәнде йөклө ваҡытта ла ҡулланырға ярамай.

✓ *Барған саҡта алға сыға алмаһа ла, Алған саҡта алға сыға әләм-һәләм.*
*(Рәшит Шәкүр).*



ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# АҠЫЛЫҢ БУЛМАҺА...

## сөрәкә баш, тиерҙәр

**"Киске Өфө"ләге был рубрика мине, йәш кешене, әсәйем һәм оләсәйемдең телмәренә иғтибарлыраҡ булырға өйрәтте. Хәҙер форсат сығып ауылға улар янына ҡайтҡан һайын, берәй ҡыҙыҡ һүҙ әйтеп ебәрмәҫтәрме, тип көтөп кенә ултырам һәм ишеткәндәремде ҡағыҙ битенә теркәй һалам. Гәзит уҡыусыларға уларҙың бер нисәһен тәҡдим итәм.**

**Шипан** - күҙе төшкән кешегә ҡаш һикертеүсегә әйтәләр.
**Әргендек** - хәлһеҙ, көсһеҙ тигәнде аңлата.
**Ихтыраз** - зәғиф кеше.
**Һәүәтә** - уйламай артыҡ ҡыланған кеше.
**Шөкәш** - эштең асылына төшөп, бар яҡлап өйрәнеп башҡарырға яратҡан кеше.
**Һерәү** - эреләнгән, хосоҡло кеше.
**Сөрәкә баш** - аҡылың юҡ, тигәнде аңлата.
**Ҡапа** - еңел холоҡло, уйламайса һөйләүсе кеше.
**Йығырмау** - елкәлек, кейем элмәге.
**Ҡылысмау** - тула ойоҡто тубыҡтан аҫта бәйләп ҡуйыу өсөн тәғәйенләнгән бау.
**Шапата** - әрпеш, бысраҡ кеше.
**Шипәтәй** - балаларҙың күндән тегелгән пинеткаһы.
**Сикаҡтау** - осҡолоҡ, йә иһә русса "икота" тигәнде аңлата.
**Кәшпидин** - русса "господин" тигәндән алынғандыр. "Ғаиләлә янғыҙ малай - кәшпидин," - тиҙәр.
**Туңҡайыу** - ҡолау.
**Тупанка** - төп һуҡма, йыуан бала.
**Тырамыҙ** - бигерәк тырыш, егәрле кеше.
**Тәпәр** - ҡыҫҡа буйлы әҙәм.
**Тупый** - бүрек.
**Барник** - заварник.
**Шывала** - күмер һоҫҡоһо.
**Сипсы** - күмер ҡыҫҡысы.
**Текмә** - баҡса картәһе, ҡойма.
**Шал** - буяу.
**Мәймүс** - оҡшамаған кешегә асыуланыуҙы белдереү.
**Бәләсник** - мыжыҡ, бәләһен һалып иларға яратыусы.
**Сукраҡ** - батҡаҡ.
**Һайғау** - түбә таҡтаһы.
**Ҡырһаҡал** - мыйыҡлы балыҡ, усач.
**Анкер** - ауылдаштарым йылға аша сыҡҡан электр линияһының "А" хәрефенә оҡшатып эшләнгән бер бағанаһын шулай атағандар.
**Сискын** - таҙалыҡ яратыусы, өйөн таҙа тотҡан кеше.
**Кәгез-бөгөз** - бигерәк арыҡ, ябыҡ кеше.
**Хөләз** - сибек кеше.
**Тупыс** - бармаҡтары өшөтөлөп йә ҡырҡылып әҙәлгән ҡуллы кеше.
**Муклашка** - йоҙороҡ.
**Букән** - ултырғыс.
**Һептек** - сүплек.
**Бутый** - элек туфли тышынан кейеп йөрөй торған бейек, ҡыуыш үксәле резина галошты шулай атағандар.
**Сусинкә** - галош кейҙерелгән бийма.
**Этмарва** - этәрмә арба.
**Буржайып ҡарау** - йөҙ боҙоп, асыуланып ҡарау.
**Өлтөк** - ҡыҫҡа итеп ҡырҡылған маңлай сәсе.
**Бипыска** - көҙгә өлгөрә күп уралған, биҙәнеп-төҙәнергә яратҡан кеше.
**Һабида** - осмалаҡ бөжәге. "Победа" машинаһына оҡшатып әйтелгән.
**Теләнсәләү** - кешегә йыш һоранып инеү.
**Энәде** - энәлек ағасы.
**Ҡапаҡтау** - кешенең алдынан алып, ҡурҡытып һөйләү.
**Шәре** - боҙ өҫтөнә ҡалҡҡан һыу.
**Күпсек** - ултырғыс юрғаны.
**Гөргөс** - юл таҙартып, ҡар көрәп килгән трактор.
**Һиҙәп** - төймә.
**Ылйырап** - иттең йомшап, таралып ҡына бешкәнлеген аңлата.
**Ҡылтипас** - оригиналь биҙәүес.
**Шлүнкә** - шәл бәйләгәндә мамыҡ менән ҡушып бәйләнгән еп.
**Ләгер** - ҡышты ауыр сыҡҡан, күтәртергә йөрөгән мал.
**Ызғытыу** - ғаиләлә талаш сығарыу, кемделер ызғытыу.
**Бигылый** - замана балаларын әллә ни ҡурҡытып булмаһа ла, тыңлашмаған саҡтарында өләсәйҙәре ошо һүҙҙе ҡуллана. Рус телендә "беглый" тигәнде аңлатҡан был һүҙ ҡолаҡҡа ятышһыҙ, ят булыуы менән алдыра.
**Һыйыр ҡойроғо тамыҙыу** - ҡатыҡҡа ҡаймаҡ һалып ашау.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**
**Әбйәлил районы.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ



# ИСЕМДӘРЕГЕҘГӘ...

## тап төшөрмәгеҙ

Һүрәттәге был сабыйҙар баш ҡалабыҙҙың башҡорт атлы балалары: Әминә Ямалова менән Камилә һәм Ғәлиаскәр Дәүләтшиндар булыр. Уларға был матур исемдәрҙе кем ҡушыуы тураһында өләсәләре Райхана Дәүләтшина һөйләп үтте: "Дилара ҡыҙым менән Динислам улым үҙҙәре боронғо башҡорт исемдәрен шул тиклем ярата һәм балаларына ла үҙҙәре теләп, шундай матур, мәғәнәле башҡорт исемдәре ҡуштылар. Дилара ҡыҙым ейәнсәремә милли геройыбыҙ Салауат Юлаевтың ҡатынының исемен - Әминә тип ҡушты һәм уның кеүек һылыу, аҡыллы, ғорур һәм рухлы булһын, шулай уҡ киләсәктә үҙенә батырыбыҙ кеүек көслө, ҡыйыу, юлбашсы тормош юлдашы осраһын, тигән теләктәр теләне. Ә Камилә менән Ғәлиаскәр Динислам улымдың балалары, уларға исемдәрҙе аталары һайланы. Камилә - камиллыҡ, матурлыҡ, тигәнде аңлата, ә Ғәлиаскәр исеме - ике мәғәнәгә эйә: "ғәли" - рухи яҡтан юғары, камил, ә "аскәр" һаҡлаусы, яҡлаусы, шулай уҡ яугир тигәнде аңлата. Ана шундай ҙур мәғәнәле исемдәр йөрөтә минең ҡошсоҡтарым".

Бәләкәстәргә аҡыллы, тәүфиҡлы булып үҫеп етеүҙәрен теләп, киләсәктә исемдәрегеҙҙе ғорур йөрөтөгөҙ, тап төшөрмәгеҙ, тип әйтке килә.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАПҠА АҪТЫНАН КЕРГӘН...

## түргә менеп өргән

Барған саҡта алға сыға алмаһа ла,
Алған саҡта алға сыға әләм-һәләм.
**(Рәшит Шәкүр).**

Бай балаһы ун бишкә еткәс баш,
Ярлы балаһы утыҙға еткәс тә йәш.
**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Хакимдың ниһен маҡтайһың-
Яуыҙ йырын йырлаған;
Егеттең ниһен маҡтайһың -
Илде дошман ҡармаған.
**(Аҡмулла).**

Яҡшы хәтерле үҙ һүҙле кешенән дә ҡурҡынысырағы юҡ.
**(Карлос Монсивес).**

Белем - бәхеттә биҙәк, ә бәхетһеҙлектә ҡасыу урыны.
**(Марсель Пруст).**

Өмөт менән йәшәргә өйрәнгәндәр бәхетле булып үлә.
**(Ҡытай халыҡ мәҡәле).**

Кемгәлер ирек бирһәң, ул һәр кемдең ауыҙын тыға башлаясаҡ.
**(Б. Крутиер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ауылда бер ҡарт йәшәгән. Ул донъя йөҙөндәге иң бәхетһеҙ кешемен, тип иҫәпләгән үҙен. Бар ауыл биҙрәгән унан: ул һәр ваҡыт кәйефһеҙ, караңғы, ҡәнәғәтһеҙ йөҙ менән йөрөгән. Туҡтауһыҙ зарланған. Ҡартая барған һайын уның был холҡо тағы ла яманыраҡҡа, түҙеп тормаҫлыҡҡа, ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙе ағыулыраҡҡа әйләнгән. Кешеләр уны әллә ҡайҙан урап үткән, ҡасырға тырышҡан: бәхетһеҙлек тиҙ йоғоусан бит. Бәхетһеҙ кеше эргәһендә бәхетле булып баҫып тороу унайһыҙ ҙа тойолған.**

**Әммә бер ваҡыт, һикһән йәше тулғас, ҡарт үҙгәргән дә ҡуйған: ул бер нигә лә зарланмай, йылмая, йөҙө нур сәсә, шул тиклем бәхетле, ти, үҙе. Был хәбәр тиҙ генә ауыл буйлап таралған һәм ауылдаштары ҡарттың йорто янына йыйылған.**

**-Һиңә ни булды? - тип һораған улар ҡарттан.**

**- Бер ни ҙә булманы, - тип яуаплаған ҡарт. -Мин һикһән йыл буйы бәхетле булырға тырыштым, әммә бер ни ҙә килеп сыҡманы. Хәҙер мин тырышмайым, бәхеттән башҡа йәшәп ҡарарға уйланым. Шуға ла мин бәхетлемен..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 5276